*Хөрмәтле уҡыусы, йортоңда аҙна һайын күңел байрамы, рух ҡуҙғыуы теләһәң, "Киске Өфө" - шундай бер сара. Уға яҙылырға онотма һәм таныштарыңды ла был хаҡта иҫкәрт. Индекстар - 50665, 50673, ярты йылға яҙылыу хаҡтары - 306 һум 84 тин, 294 һум 78 тин.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

17 - 23 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2009 ЙЫЛ

№42 (356)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Рухыбыҙҙы нығытайыҡ!



2

Урман һаҡсыһы ғына түгел...

яҡшы спортсы ла



4

Туған телдә тыңланған әкиәт...

бала рухиәтенең нигеҙ ташы



11

Хәстәрләү ҙә арта,

сырхау балалар ҙа күбәйә



12

ТВ программа

14


БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ



# ХАЛҠЫБЫҘ ЙӘНЕ ЯРАЛҒАН ЕР – УРАЛТАУ,

## ҡурайы ла, йыры ла - Уралтау бейеклегенән...

**Быйыл йыл башында иғлан иткәйнек "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" исемле был конкурсты. Беҙҙең башланғысҡа "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының "Сәләм" ижад берекмәһе лә ҡушылғайны. Ете мөғжизә исемлегенә Башҡортостаныбыҙҙы сит тарафтарҙа, донъяла таныттырҙай, уның өсөн визит карточкаһы булырҙай, халҡыбыҙ өсөн үтә әһәмиәтле тәбиғи, мәҙәни, тарихи ете объект инергә тейеш, тип билдәләгәйнек маҡсатыбыҙҙы. Әммә ошо конкурс барышында, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, яңынан-яңы һығымталарға юлығылды.**

**Иң тәүге һығымта:"Башҡортостан тигән мөғжизәле илдә башҡорт аңы, аҡылы менән бар ителгән, булдырылған, быуаттар буйы һаҡланып килеп, бөгөн дә файҙаланылған ҡиммәттәрҙе етәү менән генә сикләү дөрөҫ түгел".** Был фекерҙе беҙгә республиканың төрлө төбәктәренән, төрлө ауылдарынан шылтыратып та, хат аша ла еткерҙеләр. Халыҡ фекере итеп ҡабул иттек уны, "Беҙҙең мөғжизәләр 7-әү генә түгел, 77 лә түгел, 777 лә түгел..." тигәнде.

Сараның икенсе этабынан һуң конкурсҡа һайлап алынған ун алты объектты тәҡдим иткәс тә һорау биреүселәр күп булды: **"Етәүҙе асыҡларға маҡсат иткәс, мөғжизәләр теҙелеп киткән бик ҙур был исемлекте халҡыбыҙ өсөн иң-иң мөһимдәре башлап ебәрергә тейеш бит. Ә был ун алты атамала шул мөһимдәрҙең ҡайһы берҙәре бөтөнләй юҡ"**, - тинеләр һәм беҙҙе уйға һалдылар...

Тағы бер хәҡиҡәт асылды: **"Башҡортостандың ете мөғжизәһе" тигән рубрикағыҙҙы "конкурс" тип дөрөҫ атамағанһығыҙ, был сара конкурс та, бәйге лә була алмай, мөғжизәләребеҙҙең һәр береһе үҙенсәлекле, тик әһәмиәте буйынса уларҙың тәүге урында торғаны бар, етенсе, унынсы, егерменсе урынды биләгәне бар"** , - тинеләр. Беҙ был фекер менән дә килештек (тап шуның өсөн коллегаларыбыҙҙың -"Башҡортостан" телерадиокомпанияһы "Сәләм" ижад берекмәһенең был берлектә башланған сараны ярыш-шоуға әйләндерәеүе менән килешә алмаңыҡ һәм улар үткәргән йомғаҡлау кисәһендә ҡатнашманыҡ).

Шулай итеп, халыҡ тәҡдим иткәндәргә, шунан сығып яһалған һығымталарға таянып, үҙебеҙҙең тойомлауҙарҙы, рухиәт, тарих тураһындағы белемебеҙҙе лә эшкә егеп, "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" акцияһына йомғаҡ яһамаҡсыбыҙ был юлы. Ярҙамға аҡһаҡалдарыбыҙ Рәшит ШӘКҮР менән Ғайса ХӨСӘЙЕНОВты ла саҡырҙыҡ, уларға шулай уҡ тарихыбыҙҙы яҡшы белгән Спартак ИЛЬЯСОВ, Зәкирйән ӘМИНЕВ, рухи ҡомартҡыларыбыҙ тураһында ғәйәт күп мәғлүмәткә эйә Юлай ҒӘЙНЕТДИНОВ та ҡушылды. Әңгәмәне халҡыбыҙ тарихын, тимәк, уның рухи ҡомартҡыларын да, мөғжизәле ҡиммәттәрен дә яҡшы белгән журналист-аналитик Әхмәр ҮТӘБАЙ алып бара.


**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

**✓ Тәриҡәттең бик күп йүнәлештәре булһа ла, уның маҡсаты кешелә рухи идараны урынлаштырыуға һәм нәфсене рухҡа буйһондороуға, йәғни әкләҡи түбәнлеккә төшөүҙән һаҡлауға ҡайтып ҡала.**



*ШАҢДАУ*

# ТӘРИҠӘТСЕЛӘР - ЙӨРӘК КЕШЕЛӘРЕ...

**Әхмәр Үтәбайҙың "Шәриғәт һәм тәриҡәт... Улар - айырылғыһыҙ төшөнсәләр" (36-сы һан) тигән мәҡәләһен ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып сыҡтым. Бик ваҡытлы һәм кәрәкле мәҡәлә.**

Бигерәк тә беҙҙең халыҡты ҡайһы берәүҙәрҙең ике өлөшкә бүлеп маташҡан саҡта кәрәк был мәҡәлә. Улар милләтте "аҡыллы" тип иҫәпләгән үҙҙәре һымаҡтарға һәм ябай халыҡҡа бүлеп ҡарай. Йәнәһе, уларса, ябай халыҡ бер-ике сүрәне ятҡа белһә, дини йолаларҙы үтәр өсөн мулла яллаһа, шул еткән. Ни тиһәң дә, улар ябай халыҡ бит, башҡаға һәләтле түгел.

Ундай "аҡыллы"ларҙың тәриҡәтте инҡар итеүе наҙанлығынан килә. Тәриҡәт - ул кешене рухи яҡтан камиллаштырыуға йүнәлтелгән ғилем институты һәм унда кешенең рухи камиллашыуының нигеҙендә кешенең шәхси фиҙакәрлеге ята. Тәриҡәттең төп өлөшөн Аллаһы Тәғәләне ҙурлап иҫкә алыу - зекер, шәйех менән аралашыу (әңгәмә), шул рәүешле Аллаһы Тәғәлә хозурына ирешеү өсөн рухи таҙарыныу тәшкил итә. Тәриҡәттә рухи тәжрибәне һүҙҙәр менән еткереү мөмкин түгел, был ғәмәл шәйехтән шәкертенә тойғолары аша ғына тапшырыла. Шәйех был осраҡта тәриҡәт юлында торошусының Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ менән рухи күсәгилешлелек сылбырын тәьмин итеүсе булып тора. Ислам фәндәре араһында Ҡөрьәнде дөрөҫ итеп көйләп уҡыу ҙа шундай уҡ үҙенсәлеккә эйә. Башҡа Ислам фәндәрен өйрәнгәндә ундай ихтыяж юҡ.

Тәриҡәттең бик күп йүнәлештәре булһа ла, уның маҡсаты кешелә рухи идараны урынлаштырыуға һәм нәфсене рухҡа буйһондороуға, йәғни әкләҡи түбәнлеккә төшөүҙән һаҡлауға ҡайтып ҡала.

XIX быуатта, XX быуат баштарында башҡорт халҡы тәриҡәткә таяныуы арҡаһында үҙен һаҡлап ҡала алған. Был осорҙа тәриҡәтселәр бар иғтибарын, тырышлығын шәхестәр тәрбиәләүгә, милләттәштәребеҙҙең дини бурысын үтәүен тәьмин итеүгә, дини тормошта үҙ телен, мәҙәниәтен һәм үҙенсәлеген һаҡлап ҡалыуға йүнәлтә.

Зәйнулла, Ғатаулла, Ғабдулла ишандар, Мөжәүир хәҙрәт һәм башҡа тәриҡәтселәр ысын мәғәнәһендәге йөрәк кешеләре булараҡ, меңәрләгән кешеләрҙең йөрәген яулай, уларҙың йөрәген аса, халыҡтар араһында ғәҙеллекте, татыулыҡты урынлаштырыуҙа ғәйәт ҙур роль уйнай һәм башҡорт халҡын һаҡлап ҡалыуға өлгәшә, Башҡортостан автономияһы төҙөлөүенә ҡеүәтле этәргес көс яһай.

Беҙҙең көндәргә әйләнеп ҡайтып, мосолман өсөн иң мөҡәддәс төшөнсә - инаныу тойғоһон иҫкә төшөргө килә. Күңелендә ошо тойғоно йөрөткән кеше был донъяла бәрәкәт һәм тыныслыҡ, теге донъяла мәңгелек бәхет табыр. Ә инде халыҡтың Аллаһы Тәғәләгә инаныуын нығытыуҙа иң кәрәклеһе - тәриҡәт. Беҙгә инде халҡыбыҙҙың күңелендә киләсәгенә өмөт уятыуға булышлыҡ итеүсе тәриҡәт институтын тергеҙеү өсөн ҡулыбыҙҙан килгәнден барыһын да эшләргә генә ҡала.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Тәриҡәт" ижтимағи ойошмаһы Рәсәй Федерацияһы Юстиция министрлығы идаралығы тарафынан 2009 йылдың 8 сентябрендә теркәлде һәм Башҡортостанда үҙ эшен башланы.**

**Сәғит хажи ИСМӘҒИЛЕВ.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# РУХЫБЫҘҘЫ НЫҒЫТАЙЫҠ!

Мин "Киске Өфө" гәзитенә йыл һайын бик теләп яҙылам, һәм башҡа милләттәштәребеҙ ҙә ошо баҫманы алдырып уҡыһа, бик тә ҡәнәғәт булыр ине, тим. Ни өсөн, тиһегеҙме? Исеме "Киске Өфө" булһа ла, был гәзит есеме менән республикабыҙҙың иң яҡшы һәм уҡымлы матбуғат баҫмаларының береһе сифатында танылыу тапты. Гәзит журналистары бөгөнгө йәшәйешебеҙ өсөн иң мөһим булған проблемаларҙы ҡыйыу күтәрә белә, уларҙы төплө һәм ентекле өйрәнеп, уҡыусыларына еткереп тора. Халҡыбыҙҙың милли булмышын, тарихын, мәҙәниәтен, динен, хәҙерге тормошон сағылдырған аналитик мәҡәләләр, күренекле зыялыларыбыҙҙың "Монолог" һәм "Диалог" рубрикаларында донъя күргән фәһемле фекерҙәре тик хуплауға ғына лайыҡ. Сәйәси ваҡиғаларҙы ҡыҙыҡлы һәм ылыҡтырғыс итеп бирә алған "Аҙна шаңдауы"н күптәр көтөп ала, һәм Таһир Ишкининдың Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте премияһына лайыҡ булыуы гәзитебеҙ патриоттары өсөн дә бик шатлыҡлы. Халҡыбыҙҙың киләсәге хаҡына илһамланып ижад иткән журналистарыбыҙҙы ҡыуандырып, барыбыҙ ҙа "Киске Өфө" гәзитенә дәррәү яҙылайыҡ, рухыбыҙҙы нығытайыҡ, ватандаштар!

**МАРАТ ҠОЛШӘРИПОВ,**
**тарих фәндәре докторы,**
**БДУ профессоры.**



**Илеш районының башҡорт теле уҡытыусылары.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# "БҮГӘС ӨЛӘС" НИ ТЕЛӘЙ?

Һуңғы ваҡытта билдәле йырсы Кристина Орбакайте менән Руслан Байсаровтың 11 йәшлек улдары Дени өсөн судтарҙа тартҡылашыуы айырым ғаиләнең генә проблемаһы булыуҙан уҙып, барлыҡ матбуғат биттәрендә һәм телеканалдарҙа бер туҡтауһыҙ һүҙ алып барылған "Рәсәй проблемаһы"на әүерелде лә китте шикелле. Ҡыҙы менән элекке кейәүе араһындағы низағҡа Дениҙың "Бүгәс өләс"е лә (Алла Пугачева) килеп ҡушылды һәм: "Минең артымда күп миллионлаған тамашасыларым тора...", - тигән белдереү яһаны. Баҡтиһәң, ул ейәнен Америка Ҡушма Штаттарына дауалау һылтауы менән уҡытырға ебәрмәксе икән. Бына нисек. Ә Дениҙың атаһы Руслан Байсаров бала тыуған илендә тәрбиәләнергә тейеш, тип әйтә икән.

Ҡыҫҡаһы, бына шундай айырым ғаиләнең проблемаһы оло донъяға сығарыла, йәмәғәт. Был хаҡта бар ил халҡының белеүе кәрәктерме-юҡмылыр, уныһын үҙәктең киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре генә әйтә алалыр. Әммә беҙ, журналистар, һәр бер ваҡиғанан (ул ҙурмы, бәләкәйме, әһәмиәтлеме, түгелме) фәһем йә ғибрәт алып, Буранбай Исҡужин әйтмешләй, "ошо... ыштанһыҙ факттан" тос фекер эҙләргә тейешбеҙ. Кемгә нисектер, мине, мәҫәлән, чечендарҙың һәр милләт ағзаһына, балаһына (ул яртылаш чечен ҡанлы булһа ла) ошондай һаҡсыл ҡарашы һоҡландыра. Улар үҙ балаларын бер ваҡытта ла сит яҡҡа, сит йоғонтоға ебәреү яҡлы түгел. Ошо иғтибарға лайыҡ булмаған ваҡиғала ла тотош милләттең менталитеты күренә. Әгәр ҙә Дениҙың атаһы ла, әсәһе лә бер үк милләт вәкиле булһа, беҙ бындай күңелһеҙ ваҡиғаның шаһиты ла булмаҫ инек. Малай күптән инде Америка Ҡушма Штаттарында нн-се ыштанын туҙҙырып йөрөр ине...

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Салауат районына эш сәфәре барышында Мөрсәлим ауылында яңы мәктәп асыу тантанаһында ҡатнашты. Артабан Президент Комсомол ауылындағы "Ҡорғаҙаҡ" сығанағын реконструкциялау барышы, шулай уҡ Янғантау ауылындағы биологик таҙартыу ҡоролмаларының икенсе сираты төҙөлөшө менән танышты, Янғантауҙа асылған яңы супермаркетты ҡараны.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты тағы ла 49 ҡатын-ҡыҙға "Әсәлек даны" миҙалы тапшырҙы. 1998 йылдан алып был наградаға барлығы 4500 ҡатын-ҡыҙ лайыҡ булды. Был миҙалға ҡушып бер тапҡыр бирелә торған 10 мең һум аҡса әсәлеккә һәм балалыҡҡа ярҙам итеүсе берҙән-бер сара түгел. Дүрт балаһы булған ғаиләләргә ай һайын 1,5 мең, биш һәм унан күберәк балалы ғаиләләргә ике мең һум пособие бирелә. Туғыҙ бала тәрбиәләгән ғаиләләргә "Газель" микроавтобусы бирелә. 2001 йылдан алып 36 ғаилә ошондай микроавтобус алды.

✓Башҡортостан территорияһында йәшәгән сит ил граждандары һаны былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 22 мең кешегә кәмегән. Бөгөн республикала 32374 сит ил граждәны теркәлгән. Сит ил граждандары һаман да хоҡуҡ һаҡлау органдарының ныҡлы контроле аҫтындағы участка булып ҡала килә.

✓Рәсәйҙең 50 субъекты һәм 29 сит ил вәкиле ҡатнашҡан "Алтын көҙ-2009" Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһендә Башҡортостан аграрийҙарының уңыштары был юлы ла юғары баһаланды. Республиканан күргәҙмәгә 60 предприятие барҙы, улар иҫәбендә "Башспирт" асыҡ акционерҙар йәмғиәте, Бәләбәй сыр яһаусылары, "Башсельхозтехника" унитар ауыл хужалығы предприятиеһы һәм башҡалар бар ине. Күргәҙмәлә ҡатнашыусылар әйтеүенсә, беҙҙең республика экспозицияһы иң байы булды. Быйылғы наградалар арсеналында - Башҡортостан Хөкүмәте наградланған "Агросәнәғәт комплексындағы юғары ҡаҙаныштар өсөн" Гран-прийы һәм "Стенд менеджерҙарының әүҙем эше өсөн" махсус призы. Республикабыҙ Рәсәй Федерацияһы субъекттары араһында был махсус призға берҙән-бер эйә булыусы булды, тип хәбәр иттеләр БР Ауыл хужалығы министрлығы матбуғат хеҙмәтенән. Шулай уҡ Мәскәүҙәге төп аграр форумда төрлө дәрәжәләге 450-нән ашыу миҙал яуланды.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ДӘҮЛӘТ ӘЛӘМЕНӘ ТӨРӨП ТИЕРЛЕК...

## йәки "Япончик"тың үлеменән шоу ойоштороу кемгә кәрәк булды икән?

**Ишеттегеҙме, йәмәғәт? Шәп кеше киткән икән арабыҙҙан. Күренекле. Абруйлы. Тегеләйбылай, малай-шалай, әкәм-төкәм түгел. Рәсәйҙең иң эре ваҡытлы матбуғат саралары хәбәр итте уның вафаты тураһында. Ерләү урыны, матәм тантанаһы, уның менән хушлашырға килгән кешеләр хаҡында ла ентекләп бәйән иттеләр. Был кешенең тормош юлын, башҡарған эштәрен тәфсирләп яҙҙылар. Ә беҙҙең гәзиттәр теләһә нәмә хаҡында яҙып бармай ул. Бары тик әһәмиәтле, күҙгә ташланып торған, йәмғиәттә ҙур шаңдау тыуҙырған ваҡиғалар йә шәхестәр хаҡында ғына. Тимәк, был кеше ятып ҡалғандарҙан түгел. Илебеҙ яҙмышында ҙур урын биләп торған, ҡайһы бер үҙенсәлекле өлкәләрҙе үҫтереүгә баһалап бөткөһөҙ өлөшөн индергән, сәйәсәт һәм иҡтисад, рухи-мәҙәни тормошта ла үҙ эҙен ҡалдырған, дәүләтебеҙҙең халыҡ-ара кимәлдәге абруйына йоғонто яһау өсөн хәленән килгәндең барыһын да эшләгән ул. Шулай булғас, яҙалар инде.**

Улар бит башҡалар тураһында ла онотмай. Әйтәйек, Президентыбыҙ Дмитрий Анатольевич Медведевтың Америка Ҡушма Штаттарының дәүләт сәркәтибе Хиллари Клинтон менән осрашыуы тураһында. Йәки, Премьер-министрыбыҙ Владимир Владимирович Путиндың Ҡытайға сәфәре хаҡында. Әммә үткән аҙнала иң мөһим, иң төп медиа-персоналар (йәғни, ваҡытлы матбуғат сараларының айырым иғтибарына лайыҡ булған шәхестәр) улар булманы. Ә әлеге лә баяғы Күренекле һәм Абруйлы. Илебеҙҙе данлаған берәй эшмәкәрҙер, моғайын, әртистер, бәлки, рәссамдыр, тип уйлайһығыҙҙыр әле? Эйе, тик "данлаған" һүҙен тырнаҡ эсенә алыу урынлы булыр ине. Уның хаҡында, ғөмүмән, һүҙҙәрҙе тырнаҡ эсенә алып ҡына һөйләргә мөмкин.

Вячеслав Иваньков китте үткән аҙнала беҙҙең арабыҙҙан. Ишеткәнегеҙ юҡмы ни ундай исемде? Ә "Япончик" ҡушаматы һеҙгә бер нәмә лә һөйләмәйме? Юҡ, юҡ, японец түгел, "япона мать" та түгел. "Япончик" - ул Вячеслав Иваньковтың ҡушаматы. Илдең иң күренекле... кеме тип әйтәйем икән? Башҡорт телендәге был һүҙгә ундай мәғәнә һалған юҡ ине быға тиклем. Тырнаҡ эсенә алырға тура килә инде. "Япончик" - Рәсәйҙең енәйәтсел "авторитеты". Беҙҙеңсә, "абруй"ы була микән?

Ошо урында Япончикты ситкә ҡуйып торайыҡ. Ул юҡ инде. Табутҡа һалынған. Баш осонда поптар һәм, нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, муллалар тарафынан да, доға ҡылынған. Ергә күмелгән. Тәре ултыртылған. Һуңғы юлға оҙатыусылар баш ҡалабыҙ ресторандарында уның яҡты иҫтәлегенә бокалдар күтәргән инде. Зыяратҡа килеүселәр, Япончик менән хушлашыусылар хаҡында һөйләшеп алайыҡ.

Дин әһелдәрен аңларға, ғәфү итергә мөмкин. Улар өсөн ғәмәлдә енәйәтсе юҡ. Улар өсөн беҙ барыбыҙ ҙа Алла бәндәһе, Алла ҡоло ғына. Кеше был донъя менән мәңгегә хушлаша икән, тимәк, тейешле доғалар уҡылырға тейеш. Улар тегендә, өҫкә барып етәме-юҡмы, уларға ҡолаҡ һалалармы, тыңлайҙармы-юҡмы, уныһы бик мөһим түгел. Йола еренә еткереп үтәлһә, уҫҡа саҙаҡа төшһә, шөкөр.

Күп һанлы эреле-ваҡлы "абруйҙар", "пахандар" һәм "пацандар"тураһында, ғөмүмән, бер һүҙ ҙә юҡ. Улар өсөн Япончик ысын мәғәнәһендәге Абруй, тырнаҡһыҙ-ниһеҙ генә. Улар, Япончик кеүек үк, ошо юлды үҙҙәре һайлап алған. Улар өсөн был иң шәп, уңайлы һәм матур тормош. Ниндәй кинофильмда әйтәләр әле: "Урларға, эсергә һәм төрмәгә ултырырға", - тип? Уларҙың девизы шул. Әлбиттә, бөгөн енәйәтселектең сәскә атыуында йәмғиәтте лә ғәйепләп маташалар. Йәнәһе, ваҡытында, тайғаҡ юлға баҫырға тороусыға тейешле һүҙ әйтмәгәндәр, тәрбиәләмәгәндәр, еңенән тартмағандар, ауыҙынан тәмәкеһен, ҡулынан шешәһен тартып алмағандар.  Эйе, барҙыр ғәйебебеҙ. Бармы, йәмәғәт? Әммә барыбер, һәр бер кеше үҙ яҙмышын үҙе һайлай һәм киләсәккә юлды үҙе яра түгелме? Кемдер президент булып китә, ә кемдер... Хәйер, төпкәрәк төшһәң, ул да президент була түгелме? Енәйәтсел Рәсәйҙең "президенты". Ҡылған эштәрен, халыҡ араһындағы "абруй"ҙарын бизмәнгә һалып ҡараһаң, ҡайһы яҡтыҡы аҫҡараҡ тартыр икән, ә? Хәйер, был фактҡа асыҡлыҡ индереү түгел шул маҡсатым.

Матәм тантанаһы башланыр алдынан килеп зыяратты мина эҙләгес менән ентекле ҡапшаптикшереп сығыусы (берәйһе шартлатҡыс урынлаштырып, "Абруй" менән хушлашырға килеүсе "пахан" менән "пацандар"ҙы һәләк итеп ҡуймаһын тигән ниәттә микән?), зыяратты ҡамап алыусы (аңлауымса, ауыр ҡайғы кисереүселәр өсөн мөмкин тиклем уңайлы шарттар булдырыу маҡсатындалыр?) хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәрен дә аңларға мөмкин. Улар ҡушҡанды ғына эшләй. Бойороҡто ғына үтәй. Теләмәһә лә. Күңелдәре тартмаһа ла. Тимәк, кемдер уларға бойороҡ биргән булған. Фәлән көндөң фәлән сәғәтендә зыяратты тикшерергә, шунда булырға, байҡап торорға, тигән. Вячеслав Иваньков менән хушлашыу тантанаһы тыныс ҡына үтһен, тигән. Кем икән ул? Кемде Абруйлы енәйәтсе менән (ә, бәлки, уның менән генә түгелдер, ә башҡа эреле-ваҡлы "абруй"ҙар менән дә) тығыҙ, хатта йылы мөнәсәбәттәр бәйләй икән?

Ваганьково зыяраты алдына йыйылып, ниндәйҙер яңылыҡтымы, әллә сенсациянымы (зыяратта ниндәй яңылыҡ көтөргә булалыр инде?) аулаған журналистарҙы ла ғәфү итергә мөмкин. Улар бит үҙ теләге буйынса килмәгән унда. Уларға ҡушылған. Мөхәррирҙәре йүнәлткән. Бар, тигәндер, моғайын, Япончикты ерләүҙә кем ҡатнаша икән, байҡап кил. Берәй репортаж әтмәләрһең әле.

Шулай булғас, бер енәйәтсе (хатта ул бигерәк абруйлы енәйәтсе булһа ла) вафатынан тотош шоу яһау, уға үҙенсәлекле пиар-акция ойоштороу кемгә кәрәк булды икән? Бындай акциялар һүҙ араһында ғына эшләнмәй, ғәҙәттә, дәүләтте, йәмғиәтте көткән оло ваҡиғалар, киҫкен һынылыштар алдынан махсус рәүештә тормошҡа ашырыла. Хатта, алдан план төҙөп ҡуйыла. Халыҡты алда көткән ниндәйҙер ауыр һынауҙарға әҙерләп ҡуйыу маҡсатында, тимәк. Нимәгә әҙерләнергә һуң беҙгә? Тағы ниндәй үҙгәрештәр көтөргә мөмкин? Туранан-тура әйтергә кәрәк - енәйәтселәрҙең (ә унда йыйылыусыларҙың күбеһе рәшәткә артында бер тапҡыр ғына булмаған) көпә-көндөҙ, бер кемдән дә ҡурҡып һәм шикләнеп тормай, асыҡтан-асыҡ йыйылышып, үҙҙәренең башлыҡтарын тантаналы рәүештә (ҡыйбатлы веноктар, Ваганьково, әлбиттә, Новодевичий зыяраты түгел, әммә бында ла һәр кем ята алмай, һәм, ниһайәт, Япончик ятҡан табут алдынан йәйеп тотоп барылған Рәсәй дәүләт флагы!?) ерләүҙәре был дәүләттең ысын хужаларының кемлеген күрһәтеү булманымы икән? Бүреләр өйөрө көпә-көндөҙ ҡала урамдарына сығып олой башлаһын әле? Халыҡтың ҡотон осороу, һунарсыларҙың йөҙөнә төкөрөү булмаймы был? Күп һанлы журналистар ҙа үҙҙәренең ысын хужаларының заказын ғына үтәмәне микән? Зыярат тирәләй йыйылған милиционерҙар ҙа үҙҙәренең ысын хужаларының именлеген, йәнен һәм тәнен һаҡламаны микән?

Беҙҙе бит күптән инде ваҡытлы матбуғат саралары аша уларса һөйләшергә өйрәтеп, уларҙың йырҙарын асыҡтан-асыҡ яңғыратып, улар тураһында кинофильмдар ("Бригада", "Бандитский Петербург" һәм башҡалар) күрһәтеп, уларҙың тормош рәүешенә өйрәтеп алып баралар түгелме? Унда ла кешеләр, тип мейегә һеңдерәләр ҙә баһа. Улар, бәлки, енәйәтсе булырға үҙҙәре лә теләмәгәндер, әммә яҙмыш - яуыз, берәүҙе лә аямай, тип аңлатырға маташтылар беҙгә. Тормош - тайга, бар кеше лә бербереһенә бүре, тешеңде ыржайтып өлгөрмәһәң - үҙеңде йолҡҡолап ташлаясаҡтар, тигән "фәлсәфәлә"ләрен төшөндөрөргә ынтылманылармы ни?

Ваганьково зыяраты бик данлыҡлы урын. Унда декабристар (Беляев Александр Петрович, Бестужев Михаил Александрович, Бобрищев-Пушкин Павел Сергеевич) һәм революционерҙар (Бауман, Ведерников, Матрос Железняк), хәрбиҙәр (Бонч-Бруевич, Баранников, Масленников) һәм композиторҙар, музыканттар, йырсылар, балет оҫталары (Агапкин, Верстовский, Юрий Гуляев, Марис Лиепа, Мигуля), рәссамдар (Алексей Саврасов, Василий Суриков) архитекторҙар, актерҙар һәм режиссерҙар (Александр Абдулов, Борис Андреев, Георгий Бурков, Георгий Вицин, Владимир Высоцкий, Михаил Глузский, Олег Даль, Всеволод Мейерхольд, Спартак Мишулин), ғалимдар һәм конструкторҙар, яҙыусылар һәм журналистар һәм башҡа бик күп ысын мәғәнәһендәге абруйлы, күренекле, дан ҡаҙанған, үҙ илен, халҡын ҙурлаған, данлаған, мәҙәниәтте үҫтереүгә баһалап бөткөһөҙ өлөш индергән шәхестәр ята.

Бөгөн унда тағы ла яңы Рәсәйҙең "абруйы" - енәйәтселәр башлығы, намыҫында кеше ғүмерҙәре булған әҙәм дә һуңғы төйәген тапты.

Бәлки, ысынлап та, үлем барыһын да тигеҙләй, тигәндәре дөрөҫтөр? Бәлки, ғәфү итә белергә, енәйәтселекте йәмғиәттең айырылғыһыҙ бер өлөшө булараҡ ҡабул итергә кәрәктер? Шул уҡ кеше балалары, тайғаҡ юлға баҫҡандар, ҡырын юлдан киткәндәр икән, теге донъяла ла эҙәрлекләргәме һуң уларҙы? Рәсми власть, дәүләт органдары был "бүреләрҙең олоуына" битараф икән, беҙгә, йәмғиәткә ни эшләргә һуң? Бәлки, улар менән ҡуша ултырып олорғалыр? Ә, йәмәғәт?

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Республикала 15 сентябрҙән грипҡа ҡаршы прививка эшләү башланды. "Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан идаралығында әйтеүҙәренсә, "Сәләмәтлек" милли проекты сиктәрендә 400 мең доза "Гриппол" республикаға ҡайтарылған да инде. Улар балаларға, медицина һәм мәғариф учреждениелары хеҙмәткәрҙәренә прививка эшләүгә тәғәйенләнгән. Әле 377579 кешегә прививка яһалған.

✓ Санкт-Петербургта ЮНЕСКО акцияһы сиктәрендә "Матур мәктәп - 2009" халыҡ-ара конкурсы булып үтте. Унда Башҡортостандан 118-се, 68-се дөйөм белем биреү мәктәптәре, Белорет районы Сермән балалар йорто һәм Әлшәй районының Пионерҙар йорто балалары ҡатнашты. Улар барыһы ла конкурстың дипломдары менән бүләкләнде.

✓ Рәсәй Федераль суд приставтары хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығына быйыл тәүге ярты йыллыҡта алимент түләтеү хаҡында 45667 башҡарма документ бирелгән, шуларҙың 1345-е тулыһынса тикшерелгән, 6637-һе бурыслыларҙың эш урындарына ебәрелгән. Идаралыҡ бурысы булған алимент түләүселәрҙе эшкә урынлаштырыу өсөн халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәренә заявка ебәргән, бухгалтерия тикшереүе ойошторған. Башҡортостан идаралығы хеҙмәткәрҙәренең был тырышлығы Рәсәйҙең башҡа территориялары менән сағыштырғанда күпкә юғарыраҡ һөҙөмтәләр биргән һәм шуға ла идаралыҡ етәксеһе З. Байғусҡаровҡа Рәсәй Федераль суд приставтары хеҙмәте директоры рәхмәт белдергән.

✓ Башҡортостанда барлығы Федераль закон сыҡҡандан алып 60 мең әсәлек капиталы бирелгән. Дәүләт сертификаты алған 3919 ғаилә аҡсаларын торлаҡ өсөн кредит һәм займдарын ҡаплауға йүнәлтеү тураһында ғариза биргән. Бер тапҡыр бирелә торған 12 мең һумды алыу тураһындағы һорау менән 47776 ғаилә мөрәжәғәт иткән.

✓ БР Президенты Мортаза Рәхимов Бөтә донъя татарҙары конгресы башҡарма комитеты рәйесе Ринат Закиров менән эш осрашыуы үткәрҙе. Ул Башҡортостанда йәшәүсе татарҙарға ҙур иғтибар бүлгәне өсөн Президентҡа рәхмәт әйтте. Яҡтар мәғариф системаһында милли компонентты һаҡлауға ҡағылған, шулай уҡ юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеү, БДИ тапшырыу кеүек мәсьәләләрҙе хәл иткәндә федераль үҙәк менән диалогта берҙәм позицияла булыу тураһында һөйләшеп килеште.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## УЙЫН БИЗНЕСЫН... ҠЫУАЙЫҠ

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев район хакимиәттәре башлыҡтарын законһыҙ эшләүсе уйын салондарына ҡаршы әүҙем көрәшергә саҡырҙы.**

- Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, баш ҡалала әлегә тиклем бер нисә уйын клубы ябылмай ҡалған, - тине Павел Рюрикович. - Уҙған аҙнала беҙ Киров районындағы бер клубты ябыуға өлгөштек. Ләкин бер нисә көндән Совет районында яңы клуб барлыҡҡа килеүе асыҡланды. Тимәк, эш алып барылмай, уйын салондары бөтөрөлмәй, ә бер райондан икенсеһенә күсеп йөрөй, тигән һүҙ. Йәшерен уйын бизнесына ҡаршы аяуһыҙ көрәшергә кәрәк. Был мәсьәлә менән, беренсе сиратта, район хакимиәте башлыҡтары шөғөлләнергә тейеш.

Бөгөн баш ҡаланың Орджоникидзе (7) һәм Калинин (5) райондарында уйын салондары эшләүен дауам итә. Ҡабаттан иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, "Уйын бизнесын көйләү тураһында" Федераль закон быйыл 1 июлдә үҙ көсөнә инде. Был законға ярашлы, махсус бүленгән дүрт зонанан тыш - Приморьела, Алтай крайында, Калининград өлкәһендә, шулай уҡ Краснодар крайы менән Ростов өлкәһе сигендә - Рәсәйҙең ҡалған бөтә биләмәһендә ҡомарлы уйын бизнесы тыйыла.

## ЭШ ЮҠ, ТИМӘ...

**Өфөлә вакантлы эш урындары һанының тотороҡло арта барыуы күҙәтелә. Был турала оператив кәңәшмә ваҡытында баш ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев хәбәр итте.**

Билдәләнелеүенсә, ҡаланың мәшғүллек үҙәктәрендә теркәлгән вакансиялар былтырғы йылдың сентябре менән сағыштырғанда 500-гә артҡан һәм хәҙер 8055 урын тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта баш ҡалала эшһеҙ граждандар һанының кәмеүе лә күҙәтелә. Улар хәҙерге ваҡытта рәсми рәүештә 11893 кеше иҫәпләнә.

- Әлегә хеҙмәт баҙарында иң киҫкен торған берҙәнбер мәсьәлә - эш биреүселәрҙең хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡы түләү буйынса бурысы, - тине Павел Качкаев. - Бөгөн ул ҡала буйынса 22 миллион һум самаһы тәшкил итә. әммә бында ла ыңғай үҙгәрештәр күҙәтелә -аҙна эсендә бурыс дүрт миллионға кәмене.

## МӘКТӘПТӘ ТУҠЛАНЫУ... МӨҺИМ

**Бөгөн баш ҡаланың бар мәктәптәрендә лә тиерлек ҡайнар аш ойошторолған. Был хаҡта оператив кәңәшмәлә ҡулланыусылар баҙары идаралығынан мәғлүмәт бирҙеләр.**

Билдәләнелеүенсә, быйыл мәктәптә туҡланыусылар һаны былтырғыға ҡарағанда бер аҙға артҡан. Социаль яҡланмаған балаларҙың туҡланыуы өсөн бүленгән адреслы дотация күләме хәҙер элекке 11,27 һум урынына көнөнә 13 һум тәшкил итә. "Мәктәп һөтө" программаһы буйынса башланғыс синыф уҡыусылары аҙнаһына өс тапҡыр түләүһеҙ һөт ризыҡ алыуҙы дауам итә.

Былтыр Өфө мәктәп ашханаларындағы технологик ҡорамалдарҙы яңыртыу буйынса грант откайны, шуға ярашлы быйылғы уҡыу йылында 25 мәктәптә заманса кухня ҡорамалдары урынлаштырылды. 24 мәктәп ашханаһында капиталь ремонт үткәрелде. Киләһе йылда тағы ла 26 мәктәп ашханаһында реконструкция эштәре башҡарыласаҡ.

АФАРИН!

# УРМАН ҺАҠСЫҺЫ ҒЫНА ТҮГЕЛ...

## яҡшы спортсы ла



**Өфө урман хужалығы техникумы үткән уҡыу йылында Урман хужалығы федераль агентлығына ҡараған 19 урман хужалығы белгестәре әҙерләүсе уҡыу йорттары араһында Рәсәйҙә иң яҡшыһы тип табылды. Уҡытыу һәм тәрбиә, студент ойошмаһы эштәре өлкәһендәге юғары күрһәткестәр өсөн бирелгән был исемде яулауҙа техникумдың спортсылары ла үҙенең тос өлөшөн индерә. Был турала техникумдың физик тәрбиә етәксеһе Фирҙәүес Нури улы ЛОҠМАНОВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**▸ Техникумда студенттарҙың физик әҙерлеге лә етди иғтибар үҙәгендә. Был урман һаҡсыһы көслө булырға тейеш, тигәндән сығып эшләнәләр?**

-Ысынлап та, һуңғы йылдарҙа дөйөм ҡала һәм республика кимәлендә, шулай уҡ спартакиада һөҙөмтәләре буйынса Өфө урман хужалығы техникумы коллективы ҡала һәм республика колледж һәм техникумдары араһында 1-се урынды бер кемгә лә бирмәй. Мин үҙем 70-се йылдарҙа ошо уҡыу йортон тамамлағаймын. Ул саҡта ла техникум спорт буйынса республикала ғына түгел, Рәсәйҙә алдынғы урындарҙа ине. Унан һуң төрлө сәбәптәр арҡаһында был йүнәлештә эш һүлпәнәйеп ҡалған булған. Бынан ете йыл элек техникум етәкселеге мине эшкә саҡырҙы һәм бөгөн ярайһы уҡ уңыштарға өлгөштек, тип әйтә алам. Студенттар менән 18 төр спорт менән шөғөлләнәбеҙ, уға саңғы ла, еңел атлетика ла, милли көрәш тә, гер күтәреү ҙә, башҡа спорт төрҙәре лә инә. Волейбол, баскетбол һәм еңел атлетика буйынса иң яҡшы командалар беҙҙә. Студенттар ятағында милли көрәш менән шөғөлләнеү өсөн зал, кәрәкле йыһаздар бар, тәжрибәле тренерҙар йәлеп ителгән. Йыл һайын үҙебеҙҙең элекке студентыбыҙ, Советтар Союзы ҡатын-ҡыҙҙары араһында иң тәүге спорт мастеры Светлана Гармс иҫтәлегенә кросс үткәреү матур йолаға ингән, унда барлыҡ студенттар ҙа теләп ҡатнаша. 2004 йылдан техникумда белем алған осорҙа ике спорт мастеры, спорт мастерлығына 11 кандидат үҫеп сыҡты. Профессиональ спорт менән техникумдың яҡынса 160-лап студенты шөғөлләнә, улар араһында үҙебеҙҙең чемпиондар ҙа бар. Мәҫәлән, Наил Мөхәмәтйәнов көрәш буйынса донъя чемпионатында көмөш миҙал яуланы. Өфө урман хужалығы техникумы студенттары БР Ҡышҡы һәм йәйге полиатлон, милли көрәш буйынса йыйылма командаларында ла уңышлы сығыш яһай, Ханты-Мансийскийҙа үткән IV Бөтә Рәсәй ҡышҡы ауыл спорт уйындарында Татьяна Глушкова, Константин Павлов ҡатнашты, полиатлон буйынса РФ субъекттарының 39 командаһы араһында БР йыйылма командаһы дүртенсе урын яуланы. Надежда Берсенева (ачери-биатлон) хәҙер Рәсәй йыйылма командаһында, Тимур Әҙеһәмов та Рәсәй данын яҡлап сығыш яһай. Бөгөн Алис Ғатауллин, Фәнүр Яҡупов, Александр Йосопов, Владимир Григорьев һ.б. яҡшы күрһәткестәргә эйә.

Ҡайһы саҡта абитуриенттар араһынан спортсыларҙы махсус һайлап, уҡырға алаһығыҙмы, тигән һорау ишетергә тура килә. Юҡ, беҙ спортсыларҙы студенттар араһынан һайлап, уларҙың һәләттәрен үҫтерәбеҙ. Ҡайһы бер ярыштарҙа Стәрлетамаҡ физик культура техникумы студенттарын артта ҡалдырғаныбыҙ бар. Директорыбыҙ Дамир Ғәлиәскәр улы Асҡаров әйтмешләй, урман белгестәре сәләмәт, көслө һәм айыҡ аҡыллы булырға тейеш, ә спорт менән шөғөлләнеү уларҙы физик яҡтан ғына түгел, рухи яҡтан да нығыта, үҙ-үҙенә ышанысы арттыра.

**▸ Урта һөнәри белем биреүсе урман хужалығы техникумдарының Нижегородка өлкәһендә үткән Бөтә Рәсәй Ҡышҡы спартакиадаһында беренселекте яулап, техникум данын яңғыратыуығыҙ тураһында ла хәбәрҙәрбеҙ...**

-Үткән уҡыу йылының февраль-март айында Нижегородка өлкәһенең Красные Баки ҡасабаһында үткән Урман хужалығы федераль агентлығына ҡараған урта һөнәри белем биреүсе дәүләт учреждениелары араһындағы Бөтә Рәсәй Ҡышҡы спартакиадаһында ҡатнашып, биш студентыбыҙ: Әҙеһәмов Т., Әхмәтдинов Р., Ғатауллин А., Сөләймәнова З., Каменева Е. бөтә номинациялар буйынса беренсе урын яулап ҡайтҡас, Рәсәйҙең барлыҡ урман хужалығы техникумдарын Йәйге спартакиадаға Өфөгә саҡырҙыҡ. Оло яуаплылыҡ талап иткән был сараны үткәреүҙә Урман хужалығы, Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм, Мәғариф министрлыҡтары һәм башҡа ойошмалар ҙур ярҙам күрһәтте.

Ярыш өс төр: йөҙөү, атыу һәм еңел атлетиканан торҙо. Бында ла Өфө урман хужалығы студенттары йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәне. Эстафетала еңеү яулап, техникум 50 мең һумлыҡ сертификат алды, уны спортзалды йыһазландырыуға тотонмаҡсыбыҙ. Дөйөм команда иҫәбе буйынса беренсе урынды ла беҙҙең студенттар яуланы, быны өсөн токсация кабинетын йыһазландырыу өсөн 700 мең һумлыҡ сертификат менән бүләкләндек.

Нижегородка өлкәһендә старт алған был матур традиция артабан да дауам итер, тигән ышаныста ҡалам, сөнки ул йыл һайын бер техникум базаһында үтәсәк, ә башҡа уҡыу йорттары теге йәки был техникумда уҡытыу-тәрбиә эше нисек ойошторолоуы менән таныша аласаҡ. Алдынғы тәжрибә, фекерҙәр менән уртаҡлашып эшләү ҡыҙыҡлы, студенттар ҙа бер-береһе менән аралаша, бәйләнеш тота ала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сәләмәт тормош Өфө урман хужалығы техникумы студенттары өсөн йәшәү рәүешенә әйләнгән. Бөгөн студенттар өсөн төп урында һөнәри белем алыу торһа ла, уны улар ижадҡа һәм спортҡа урын булған мауыҡтырғыс студент тормошо менән бергә алып бара, тимәк, урмандың киләсәге сәләмәт рухлы белгестәрҙең хәстәрлекле һәм көслө ҡулдарында.**

Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓15 октябрҙән 25-нә тиклем гәзит-журналдарға яҙылыу буйынса Бөтә Рәсәй декадаһы үтә. Ошо ун көн эсендә бөтә матбуғат баҫмаларына льготалы шарттарҙа яҙылырға мөмкин. Иң әүҙем яҙылыусыларға бүләк-сувенирҙар тапшырыу ҙа ҡаралған.

✓Әле баш ҡалабыҙҙа аҙна һайын ауыл хужалығы йәрминкәләре уҙа. Продукцияға хаҡтарҙы анализлағанда, шул күҙгә ташлана: картуф былтырғыға ҡарағанда арзанараҡ, быйыл уның бер килоһы 8 һум тирәһе тора. Ит һәм бал былтырғыға ҡарағанда байтаҡҡа ҡиммәтерәк. Йәрминкәләр октябрь аҙағына тиклем дауам итәсәк.

✓Баш ҡалабыҙҙа БР Композиторҙар союзының сираттағы съезы үтә. Быйыл ошо ижади ойошма үҙенең 70 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Ошо үҙенсәлекле форум барышында биш концерт һәм ике музыкаль спектакль күрһәтеләсәк. Съезд отчет-һайлау йыйылышы менән тамамланасаҡ.

✓Тиҙҙән Өфөләге Салауат проспектында 500 квадрат метр майҙанлы яңы гипермаркет асыласаҡ. "Сауҙа проекты" компанияһы үҙенең ун йыллығын ошондай объект асыу менән билдәләй. Был гипермаркетта сауҙа технологияһы ҡорамалдары һатыласаҡ, әлегә тиклем республикабыҙҙа бындай махсус сауҙа майҙансығы юҡ ине.

✓21 октябрҙә Башҡортостан парламентының сираттағы ултырышында киләһе йыл бюджеты проектынан тыш, алдағы өс йылға республиканың социаль-иҡтисади үҫеш прогнозы ла ҡараласаҡ. Иҡтисадсыларыбыҙҙың күҙаллауынса, республикабыҙҙа уртаса эш хаҡы 2008 йылдағы 14 084 һумдан 2012 йылда 21 040 һумға етеүе, йәшәү минимумының 4 490 һумдан 6 215 һумғаса күтәрелеүе, ә хаҡтар үҫешенең 12 проценттан 7 процентҡа тиклем кәмеүе фаразлана.

✓Октябрь айында Өфө ҡалаһында "Үҙеңде тикшер һәм сәләмәт бул: һөт биҙҙәренең яман шешен профилактикалау" акцияһы уҙғарыла. Акция сиктәрендә иң элек стационарҙарҙа маммография уҙғарыу, дауалау-профилактика учреждениелары белгестәренең консультациялары, уҡыу йорттарында лекциялар ойоштороу, һөт биҙҙәре яман шешен иртә диагностикалау мәсьәләләрен киң матбуғат сараларында яҡтыртыу ҡаралған.

*✓ Студенттарға ҡуйылған талаптар ҙа ҡаты бында, ятаҡта ла тәртип яҡшы, тимәк, баш ҡалаға уҡырға ебәргән улы йәки ҡыҙы өсөн ата-әсә артыҡ борсолмаһа ла була.*



*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Республикала һәм Өфөлә балалар баҡсаһы учреждениелары селтәре киңәйтелгәс, был өлкәлә белгестәргә ҙур ихтыяж барлыҡҡа килә һәм Совнарком ҡарары менән баш ҡалалағы Башҡорт педагогия училищеһы балалар баҡсалары өсөн белгестәр әҙерләүсе педагогик училищеға әйләнә. 1939 йылда үҙ аллы уҡыу йорто булараҡ эш башлаған был белем усағы ошо көндәрҙә үҙенең 70 йыллыҡ оло юбилейын билдәләй.**

# УҠЫТЫУСЫ ҺӘМ КИТАПТЫ...

## технологиялар алыштыра алмай



Бөгөн күп профилле белем биреү учреждениеһы һаналған 1-се Өфө педагогия колледжы Башҡортостандың урта һөнәри белем биреүсе уҡыу йорттары араһында иң алдынғыларҙан иҫәпләнә. Республикалағы ниндәй генә белем биреү учреждениеһын алма, уның нигеҙен ошо колледж системаһын үткән белгестәр тәшкил итеүендә бер шик тә юҡ, сөнки 14-15 йәштә яратып һайлаған һөнәрен икенсегә алыштырыусылар һирәк булалыр, моғайын. Балалар баҡсаһы тәрбиәселәре, башланғыс синыф, башҡорт һәм инглиз телдәре уҡытыусылары әҙерләүсе был уҡыу йорто бөгөнгө ауыр заманда ла абитуриенттарға ҡытлыҡ кисермәй, быйыл да бында 9-сы һәм 11-се синыф нигеҙендә бер нисә төркөм студенттар ҡабул ителгән.

Етмеш йыл эсендә уҡыу йортона ғына хас матур традициялар барлыҡҡа килгән: йыл һайын Белем көнө, Һаулыҡ көнө, Үҙидара көнө, Театр көнө, Коллектив ижад эштәре көнө үткәрелә, тәрбиә һәм синыфтан тыш эштәр системаға һалынған. Студенттарға ҡуйылған талаптар ҙа ҡаты бында, ятаҡта ла тәртип яҡшы, тимәк, баш ҡалаға уҡырға ебәргән улы йәки ҡыҙы өсөн ата-әсә артыҡ борсолмаһа ла була. Волейбол, баскетбол, еңел атлетика секциялары эшләй, быйыл уларҙың һаны тағы ла артҡан. Колледжда Бокс федерацияһы менән берлектә бокс секцияһы эш башлаған, унда яҡын-тирәләге уҡыу йорто студенттары, ҡала йәштәре лә шөғөлләнә аласаҡ.

Уҡыу йорто етәкселеге фекеренсә, буласаҡ уҡытыусы зауыҡ менән кейенергә, дөрөҫ итеп аралаша белергә лә тейеш. Шуға ла "Стилистика" тип аталған махсус курс асырға уйлайҙар. 5-се курс студенттары өсөн "Эшкә урынлашыу нигеҙҙәре" тигән психологик тренингтар ҙа үткәреләсәк, сөнки йәш белгес ни тиклем генә белемле булмаһын, бөгөнгө шарттарҙа эшкә урынлашҡанда үҙен тейешле кимәлдә күрһәтә алмауы бар. Милли кадрҙар әҙерләүсе уҡыу йортонда студенттар халыҡ бейеүҙәре, вокал һәм эстрада ансамблдәрендә, театр, ҡурай түңәрәктәрендә әүҙем шөғөлләнә.

Колледжға йәш, алдынғы ҡарашлы етәксе, педагогия фәндәре кандидаты Рәфҡәт Самат улы Үмәрғәлин килгәс, бында өҫтәмә белем биреү үҙәге лә барлыҡҡа килгән. Хәҙер студенттар 17 йүнәлеш буйынса өҫтәмә һөнәр ала, колледжды тамамлаған саҡта уларға, дипломға ҡушып, танытма ла бирелә. Бынан тыш, маркетинг хеҙмәте, интернет-сайт асылған, материаль-техник база ла нығынған, 50-гә яҡын компьютер һатып алынған, бинаға капиталь ремонт эшләнгән. Колледжды тамамлаған йәш белгес яңы коммуникацион технологиялар менән ҡуллана һәм идара итергә, туған телен яҡшы белергә, шул уҡ ваҡытта инглиз телендә лә иркен аралаша алырға тейеш, тип иҫәпләй уҡыу йорто директоры һәм бының өсөн бар шарттарҙы ла тыуҙырырға тырыша. Быйылғы уҡыу йылынан беренсе курс студенттары өсөн инглиз телен өҫтәмә рәүештә тәрәнәйтеп өйрәнеү ойошторолған да инде.

Икенсе уҡыу йылы дауамында колледж һөнәр биреү менән бер рәттән, икенсе йүнәлеш алып, педагогик кадрҙар әҙерләү, яңынан әҙерләү һәм квалификация күтәреү буйынса ресурс үҙәк булдырған һәм башланғыс синыфтар уҡытыусылары һәм балалар баҡсалары тәрбиәселәре өсөн семинарҙар, квалификация үҫтереү курстары ойоштора башлаған. Әлеге ваҡытта уҡыу йортоноң тәжрибәле методистары республика буйлап бушлай бер көнлөк курстар үткәреү менән шөғөлләнә.

Тағы ла бер яңылыҡ бар 1-се педагогия колледжында: һәр шәмбе һәм йәкшәмбе мәктәпкәсә һәм мәктәп йәшендәге балалар бушлай төрлө түңәрәктәрҙә шөғөлләнә аласаҡ. Дәрестәрҙе студенттар үткәрәсәк, уларға бының өсөн күпмелер хеҙмәт хаҡы ла түләнәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөн донъялағы иң изге һөнәр эйәләрен әҙерләүсе уҡыу йортоноң эшмәкәрлеге өсөн заманса технологиялар, интернет алыштырғыһыҙ ярҙамсы булһа ла, бында бер ҡасан да уҡытыусы роленең баһаһын онотмайҙар. Шуға ла Рәфҡәт Самат улының "Уҡытыусы һәм китаптың урынын бер ниндәй ҙә алдынғы технология тулыһынса алыштыра алмай, сөнки шәхесте шәхес кенә тәрбиәләй ала. Беҙ бында уҡытыусылар әҙерләйбеҙ, ә ул, тәү сиратта, баланы яратырға, бала һәм уның ата-әсәһе менән аралаша белергә тейеш", тигән һүҙҙәре менән килешмәү мөмкин түгел. Уҡытыусылар әҙерләүсе урта һөнәри уҡыу йорттары араһында Өфөләгеһе, бәлки, ошо үҙенсәлеге менән дә буласаҡ уҡытыусыларҙы һәм тәрбиәселәрҙе үҙенә тартып торалыр.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

*БАҠСА*

# ҺЫРҒАНАҠ ТА ДАРЫУ...

## ҡуллана белһәң

**Октябрҙә һырғанаҡ емештәре өлгөрә. Һырғанаҡ менән электән яугирҙарҙы һәм аттарҙы дауалағандар. Бөгөн был шифалы үҫемлекте һәр баҡсасы тиерлек үҫтерә.**

Һырғанаҡ ике өйлө үҫемлек, йәғни инәлек һәм аталыҡ сәскәләре айырым үҫемлектә урынлашҡан. Ул иртә яҙ сәскә ата һәм ел ярҙамында аталана, бер нисә инә ағасты аталандырыу өсөн бер ата ағас та етә. Үҫемлектәр бер-береһенән бер нисә метр алыҫлыҡта урынлашһа ла ярай, был осраҡта яҡшы уңыш алам, тиһәгеҙ, сәскә атыу осоронда ата үҫемлек ботағын инә ағастың олонона бәйләп ҡуйығыҙ. Һырғанаҡ ултыртҡан саҡта соҡорға ҡом өҫтәгеҙ, сөнки ул тупраҡтың еңел төрҙәрен ярата. Емеште йыйыу бер аҙ ауырлыҡ тыуҙыра, шуға ла һырғанаҡты бәләкәй генә сыбыҡтарға һындырып йыйырға мөмкин, ағасҡа был зыян килтермәй. Һыуыҡтар төшһә, емеш ботағынан еңел айырыла.

Емештәрҙе йыйып алғас, өй шарттарында һырғанаҡ майы әҙерләргә була. Бының өсөн емештәрҙең һутын һығып алып, унан тороп ҡалған массаны киптерергә, ваҡларға һәм 1:2 иҫәбе менән өҫтөнә таҙартылған үҫемлек майы ҡойорға. 1-2 аҙнанан һуң өҫкә ҡалҡып сыҡҡан һыуҙы түгергә. Бындай юл менән әҙерләнгән һырғанаҡ майы бешкән урынды яҡшы дауалай. Һығып алынған һутҡа 1:1 иҫәбе менән шәкәр өҫтәп, стерилләнгән банкаларға тултырып, һыуытҡыста һаҡларға була. Уны аҙаҡ һыу менән болғап эсәләр. Емештәрҙе 1-2 минутҡа ҡайнар һыуға төшөрөп алып, иләк аша үткәреп, шәкәр сиробы менән бутаһағыҙ, ҡуйы һут килеп сыға. 1 кг һырғанаҡҡа сироп әҙерләү өсөн 400 г шәкәр һәм 2 стакан һыу кәрәк. Желе әҙерләү өсөн һырғанаҡ һутына шәкәр сиробы ҡушығыҙ һәм 30-40 минут ҡайнатығыҙ. Масса бер аҙ кәмегәс, ҡоро стерилләнгән банкаларға тултырырға һәм һалҡынса урында һаҡларға. Һырғанаҡтан тәмле ҡайнатма ла әҙерләйҙәр. Емештәрҙе йыуып, киптергәс, ҡайнар сироп ҡойоп, 3-4 сәғәткә ултыртып тороғоҙ. Емештәр иҙелмәһен өсөн, уларҙы сироптан айырып алығыҙ һәм сиропты ҡайнатып сығарығыҙ. Уның өҫтөнә емештәрҙе һалып, әҙер булғансы талғын утта ҡайнатығыҙ. 1 кг емешкә 1,5 кг шәкәр, 1,2 л һыу алына. Шулай ҙа һырғанаҡ емештәрен һаҡлауҙың иң ябай ысулы - туңдырыу. Был осраҡта емештәр бөтә файҙалы сифаттарын һаҡлаясаҡ.

Октябрь аҙағында дарыу үләндәре сәсеп ҡалыу ҙа отошло. Бөтнөк (мята) тамыр ярҙамында үрсей, бының өсөн уны айырып алып, 3-4 см тәрәнлектәге соҡорға горизонталь рәүештә һалырға кәрәк. Өҫтөнә торф һалып, һыу һибергә. Быны ҡыш алдынан эшләп ҡалһағыҙ, фитонцид үҫемлек йыл әйләнәһенә ҡул аҫтығыҙҙа буласаҡ. Бөтнөк астма, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарынан файҙалы.

Ҡышҡылыҡҡа бесәй үләне (валериана лекарственная) лә сәсергә була, әгәр ҙә уны яҡшы итеп тәрбиәләһәң, дарыу өсөн ҡулланылған тамыры беренсе йылда уҡ өлгөрөп етә. Мелисса ла яҡшы ҡышлай. Ул тынысландырыу һәләтенә эйә, сәйгә үҙенсәлекле тәм дә бирәсәк. Шифалы ромашканы ла йылдың ошо миҙгелендә сәсәләр. Уның орлоҡтары бигерәк ваҡ, шуға ла 1-2 см тәрәнлек иң ҡулайлыһы. Ҡуйы ҡыҙыл эхинацея ултыртһағыҙ, ул баҡсағыҙҙы эре сағыу сәскәләре менән дә биҙәр, ерҙән өҫкө өлөшөн сәйгә һалып эсһәгеҙ, иммунитетығыҙҙы ла нығытыр.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

## Алма



Йоҡлар алдынан алма ашау файҙалы, сөнки уны сәйнәгән саҡта ауыҙ ҡыуышлығында 90 процентҡа яҡын бактерия үлә. Төнгөлөккә ашалған 2-3 алма ҡандағы шәкәрҙе түбәнәйтә, ҡырғыстан үткәрелгән алманы компресс рәүешендә бешкән, өшөгән һәм оҙаҡ йүнәлмәгән яраларға ябырға ярай. Ашҡаҙан насар эшләгәндә, ашҡаҙан-эсәк сирҙәрендә ас ҡарынға алма ашау яҡшы һөҙөмтә бирә, бындай ауырыуҙар йонсотҡанда "алма" көндәре үткәреп алығыҙ: бының өсөн көнөнә 1,5-2 кг алма ашарға кәрәк буласаҡ. Бындай диета йөрәк сирҙәренән, ҡан баҫымы юғары булғанда, артыҡ ауырлыҡтан яфаланғанда ла ҡулланыла, тик ашҡаҙан әселеге юғары булғанда алманың татлы сорттарын, ә түбән булғанда әсе сорттарын һайлағыҙ.

## Гемоглобинды күтәреү өсөн

Йыуып, киптерелгән ҡарабойҙай ярмаһын ваҡлағыҙ һәм 1-2 аҙна дауамында көнөнә 3 тапҡыр аш алдынан 1 балғалаҡ ашағыҙ. Гемоглобинды соя аҙыҡтары ла яҡшы күтәрә, шуға ла киптерелгән соя һөтөн төрлө аҙыҡтарға ҡушығыҙ. Һәр иртә 2 ҡалаҡ йәшел алма, лимон, гранат, ҡыҙыл сөгөлдөр һәм кишер һуттары ҡушылмаһына бал ҡушып эсеү ҙә яҡшы һөҙөмтә бирә.

## Быуындар һыҙлағанда

Бер биҙрә һыуға 10 грамм эт дегәнәге (череда) үләнен өҫтәп, 38 градус эҫелектәге ванна инегеҙ, ошо үләнде сәй итеп эсегеҙ һәм үләндең һутын быуындарға һөртөгөҙ.

## Гайморит

Мамыҡ тампонды балға манып, танау ҡыуышлығына тығып ҡуйығыҙ. Был процедураны йоҡлар алдына эшләү яҡшыраҡ. Ун көн шулай дауаланғандан һуң, сирегеҙ ҡул менән һыпырып алғандай, юҡҡа сығыр. Һалҡын алдырыу менән, был дауаны ҡабатлай һалығыҙ.

## Грек сәтләүеге көс өҫтәр

Тиҙ арый башлаһағыҙ, грек сәтләүеге ашағыҙ. Унда С витамины ҡара ҡарағатҡа - 8, цитрус емештәргә ҡарағанда 50 тапҡырға күберәк. Көнөнә 10 грамм сәтләүек көс өҫтәр, ауырыуҙарға ҡаршы тороусанлыҡты арттырыр, организмды витаминдар менән дә байытыр.

✓ *Башҡорттар суҡындырыуҙы ҡабул итмәгән, һуғыш мәлдәрендә улар араһында һатлыҡ йәндәр әҙ булған. Башҡорттар күндәм, фиҙакәр һәм хәрби тормошта ҡаһарманлыҡ, батырлыҡ өлгөһө күрһәтеүгә һәләтле.*






## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Мәктәп

● Туп һәм тағанда атланыу кеүек уйындар һеңерҙәрҙе ҡеүәтләндерә, тәнде сәләмәтләндерә. Шуның өсөн бындай уйындарға ҡатнашығыҙ.

● Уйындарығыҙ ял сәғәттәрендә, дәрестәрегеҙ һәм башҡа эштәрегеҙгә зыян килтермәҫлек сиктәрҙә һәм таҙа, яҡшы һауалы урындарҙа, бик әҙәпле булһын.

● Мәктәптән ҡайтҡас, ата-әсәгеҙгә сәләм биреп, китаптарығыҙҙы һәм дәреслек әйберҙәрегеҙҙе билдәле урынға ҡуйығыҙ. Уйнағығыҙ килһә, әҙәпле генә уйнағыҙ, дәрестәрегеҙҙе эшләмәйенсә йоҡламағыҙ.

● Мәктәп эсендә лә, башҡа урында ла әҙәпһеҙ һүҙ һөйләмәгеҙ, ярамаған ишараттарҙа булмағыҙ. Сөнки бындай нәмәләрҙән тәрбиәле кешеләр нәфрәт итә.

● Дәрестәрен ҡалдырған йәки билдәләнгән сәғәткә һуңлап йөрөгән шәкерттәр өсөн һабаҡтар ҡыйын була. Иптәштәренән артта ҡала. Шуның өсөн дәрестәрегеҙҙе ҡалдырмағыҙ, һуңламағыҙ.

● Мәктәпкә йөрөүҙең һәм уҡыуҙың маҡсаты - иман белеү, тәрбиәле һәм камил кеше булыу икәнен хәтерегеҙҙән сығармағыҙ һәм ошо маҡсат өсөн ихлас йөрөгөҙ. "Нисек мәктәпкә бараһығыҙ һәм нисек уҡыйһығыҙ?" - тип һораусы булһа, һеҙ: "Аллаһы Тәғәләнең бойороғон еренә килтереү өсөн, ата-әсәмә доғасы булыу, туғандарым һәм ҡарындаштарыма, ырыуҙаш һәм диндәштәремә файҙалы кеше булыуҙы өмөт итәм", - тип яуап бирегеҙ. Бындай яуап биреү баланың аҡыллы икәненә дәлил була.

● Мәктәптәрҙә дәрестәр бөткәс: "Инде уҡыу ваҡыты үтте, белем дә етерлек булды", - тип белемдән һәм китаптарҙан айырылмағыҙ. Буш ваҡытығыҙҙа яңы китаптар (кәбәк һәм сүп-сар булғандарынан башҡаларын), әҙәби әҫәрҙәр уҡығыҙ. Уҡыһағыҙ, зиһенегеҙ асылыр, аҡылығыҙ артыр, фекерҙәрегеҙ дөрөҫ булыр.

● Ғалимдар - пәйғәмбәрҙең вариҫтары, донъяның нурҙары була. Наҙандар донъяға тыуһалар ҙа, - үлектәр кеүек, сөнки улар Аллаһы Тәғәләнең ғәжәйеп нәмәләренә кәрәккәндә генә күҙ һала, ләкин ғибрәт ала белмәй. Кәрәк ваҡытта һыу эсәләр, әммә һыуҙың нисек хасил булыуын, шишмәләрҙең ҡайҙан килеп, ҡайҙа китеүҙәрен белмәй.

● Белемле күп кешеләр алдында аҙ ғилемле булыуҙан оялмағыҙ. Ҡулығыҙҙан килгән нәмәләрҙе белмәй ҡалыуҙан оялығыҙ. Сөнки был ғәйептер.

● Белем әһелдәренә нәфсе артынан йөрөү һис килешмәй. Шуның өсөн шәриғәт үлсәүенән тыш мал һөймәгеҙ. Нәфсегеҙгә әсир булмағыҙ.

● Һәр ваҡыт белемде яратығыҙ. Өйрәткәндәрҙе ихлас тыңлағыҙ, һуңынан кәрәккәнен өйрәнегеҙ, һәр ғилемдән матур нәмәләрҙе белегеҙ, һис бер ваҡыт ғилемгә тәкәбберлек күрһәтмәгеҙ.

*ШАҢДАУ*



**Психолог Вадим Сафин менән яҙыусы Ғәлим Хисамовтың менталитет хаҡындағы әңгәмәһе ("Сардар фарман бирмәйәсәк, йәки Башҡорт менталитеты тураһында...", 37-се һан) берәүҙе лә битараф ҡалдырмағандыр һәм гәзит уҡыусыларҙа тик бер төрлө генә фекер уятмағандыр, тип уйлайым. Бәхәскә сәбәп бар икән, мин дә үҙ фекерҙәремде белдерергә булдым.**

# ТӨП ҺЫҘАТЫБЫҘ - ИХЛАСЛЫҠ,

## фиҙакәрлек, ҡаһарманлыҡ, эскерһеҙлек, алсаҡлыҡ...

Хәҙерге заман философияһы менталитетты социаль психология, йәмғиәт аңы, эске аң-рухиәт донъяһы кеүек киң, төрлө кимәлле һәм тәрән фәнни төшөнсәләрҙең бер өлөшө итеп ҡарау яғында. Википедия интернет һүҙлегендә менталитет төшөнсәһенә шундай аңлатма бирелә: "Менталитет - индивидҡа йәки кешеләр төркөмөнә хас фекерләү рәүеше, донъяны ҡабул итеү, рух торошо". Әммә был билдәләмәнән айырмалы рәүештә, менталитеттың йөкмәткеһе тәрәнерәк һәм киңерәк. Менталитет төшөнсәһе күберәк көндәлек аралашыуҙа ҡулланыла, көнкүреш аңда сағыла. Бер нисә йыл элек мин дуҫтарыма "Нимә ул менталитет?" тигән һорау бирә торғайным. Уларҙан оҙаҡ ваҡыт етди аңлатма көтөп йөрөгәндән һуң: "Менталитет, тимәк, осоп йөрөүсе милиционер" - тип уларҙы көлдөрә инем.

Ә инде һүҙ уйнатыуҙы ситкә ҡуйып, В.Сафин менән Ғ.Хисамов әңгәмәһендә ҡуйылған мәсьәләгә етди күҙлектән ҡарағанда, халыҡтың айырым һыҙаттарын һанап сығып, шуларҙан анкета юлы менән уның менталитетын билдәләү алымы уңышлы түгел. Киреһенсә, бында Ер шарының барлыҡ халыҡтарына хас һыҙаттарҙы билдәләп, шуның фонында үҙенең милләтенең менталитетын билдәләү кәрәктер. Әгәр ҙә мәсьәләгә ошолай килгәндә, донъя халыҡтары менталитетының өс дөйөм төрөн билдәләү мөмкин булыр ине:

1.Фекер йөрөтөүсе-философ халыҡтар (инглиздәр, немецтар, Скандинавия, Балтика буйы халыҡтары, йәһүдтәр һ.б.);

2.Прагматик-эшмәкәр халыҡтар (американдар, ҡытайҙар, японлар һ.б.);

3.Күҙәтеүсән-рухи-ижади халыҡтар (һиндтар, французлар, итальяндар, ғәрәптәр, африкандар һ.б.).

Ошо әйткәндәрҙән сығып ҡарағанда, шуны күрергә була: немецтар донъяға бик күп ғалим һәм философтар тыуҙырған милләт; американдар иһә донъяның иң ҙур иҡтисадын барлыҡҡа килтергән, быға улар ышанған эшмәкәрлеккә өндәгән христиан диненең протестанизм йүнәлеше булышҡан; донъялағы мәҙәни ҡомартҡының 40 проценты итальяндар илендә һаҡлана, ә французлардыҡы менән бергә - яртыһынан күбеһе; ғәрәптәр тулыһынса кешенең рухи донъяһына таянған ислам динен тыуҙырған; һиндтар кешенең рухи донъяһын бар тәбиғәт менән бергә бер бөтөн итеп күргән индуизм һәм буддизм диндәрен ижад иткән; Африканың көйҙәре һәм бейеүҙәре донъяға рок-музыка һәм ритмик бейеү булып таралған, әле африкандарҙың татуировка һәм граффити традицияһы популярлыҡ яулай. Әлбиттә, бындай бүленештәр бик шартлы, сөнки бында һүҙ халыҡтарҙың дөйөм һыҙаттары хаҡында бара. Шул уҡ ваҡытта һәр бер халыҡтың теге йәки был вәкиленә башҡа менталитет һыҙаттары ла хас булыуы мөмкин.

Әгәр ҙә халҡыбыҙҙың менталитетын ошо өс төрлө бүленеш күҙлегенән генә ҡараһаҡ, беҙ уны өсөнсө төргә индерер инек һәм унда тәүге ике төр менталитеты дефициты мәсьәләһе үҙенән-үҙе килеп сығыр ине. Әлбиттә, В. Сафин һанаған моңлолоҡ, ышаныусанлыҡ, түҙемлелек кеүек һыҙаттарҙы "күҙәтеүсән-рухи-ижади" менталитет менән аңлатып була, әммә башҡорттоң идеяға тоғролоҡ (диненә, тыуған иленә һәм халҡына) һыҙатын нисек аңлатырға була һуң? Өҫтәүенә, башҡорттар суҡындырыуҙы ҡабул итмәгән, һуғыш мәлдәрендә улар араһында һатлыҡ йәндәр әҙ булған. Башҡорттар күндәм, бер үк ваҡытта фиҙакәр һәм хәрби тормошта ҡаһарманлыҡ, батырлыҡ өлгөһө күрһәтеүгә һәләтле.

Быларҙың барыһын да В. Сафин тәҡдим иткән һыҙаттар йә Ғ. Хисамов килтергән яугирлеккә бәйле дәлилдәр менән генә аңлатып буламы? Өлөшләтә генә булалыр. Бында халҡыбыҙҙың рухи-романтик булмышынан хасил булған алсаҡлыҡ, тиҙ ышаныусанлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ, әҙәплелек һыҙаттары, бай күңел донъяһы, эске мәҙәниәте, эскерһеҙлеге хаҡында һүҙ алып барырға мөмкин булыр ине. Быларҙың нигеҙендә, әлбиттә, ихласлыҡ ята. Беҙҙең халыҡтың менталитетының төп һыҙаты ла ошо ихласлыҡта бит, йәғни башҡа барлыҡ күркәм һәм төрлө ситуациялар күҙлегенән етешһеҙлек булып күренгән һыҙаттарыбыҙ ҙа ошо ихласлыҡтан килә. Әммә ихласлыҡ - беҙҙең халыҡтың иң ҙур көскә эйә һыҙаты. Ошо төшөнсәләрҙән сығып ҡараһаҡ, халҡыбыҙ бөйөк рухлы халыҡ икәнен күрәбеҙ.

Ә инде әңгәмәлә ҡатнашыусылар килтергән башҡа һыҙаттарҙы (ябайлыҡ, түҙемлелек, йыуашлыҡ, баһымсаҡлыҡ, һәлмәклек, күндәмлек, үпкәселлек) беҙҙең милләт менталитетының дөйөм һыҙаттары итеп түгел, ә айырым кешеләрҙең етешһеҙ яҡтары итеп кенә ҡарау кәрәктер. Был һыҙаттар башҡорттарға ғына хас түгел. Әйтәйек, күрһәтелгән һыҙаттар айырыуса буддизм динен тотоусы халыҡтарҙың вәкилдәренә бик тәрән рәүештә хас. Бер тормош ситуацияһынан (ауылдан ҡалаға) икенсеһенә күскән ваҡытта төрлө хәлваҡиғаларҙа бөтә милләт вәкилдәрендә күрергә була бындай һыҙаттарҙы. Күп осраҡта кеше яңы шарттарға адаптация осорон үткәндән һуң бындай һыҙаттар юҡҡа сыға. Минеңсә, диалогта ҡатнашыусылар был һыҙаттарҙы беҙҙең менталитетҡа хас һыҙаттар тип раҫлауҙан бигерәк, беҙгә уларҙан арынырға кәрәк, тигәнде әйтергә теләй кеүек.

Беҙгә үҙебеҙҙең халыҡтың менталитетын ныҡлап өйрәнергә кәрәк, әлбиттә. Бигерәк тә нимә менән ғорурланырға, нимәнән ҡотолорға кәрәк икәнде лә билдәләр өсөн кәрәк бындай фекер алышыуҙар. Беҙҙең күптәребеҙгә, мәҫәлән, дыуамаллыҡ, ҡыҙыу ҡанлыҡ, алабарманлыҡ, вайымһыҙлыҡ, тәкәбберлек, көнләшеү, биргән һүҙҙә тормау, эреләнеү, сабатаны түргә элеү кеүек бик күп халҡыбыҙ менталитетына хас булмаған, ҡайһылыр бер осорҙа ҡылыҡтарыбыҙға "йоҡҡан" сифаттарҙан да ҡотолорға кәрәк.

**Хәлил БАРЛЫБАЕВ,**
**иҡтисад фәндәре докторы,**
**Рәсәй Федерацияһы Президенты эргәһендәге Дәүләт хеҙмәте академияһы профессоры.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

## ФАНИ ДОНЪЯ ГӨЛ БАҠСА...
## уға һыу һибергә онотма

▸ Ураҡ урыу бер ғүмер, бесән сабыу бер дәүер - шул мәлдә йөрәгең елкенһен, күңелең йырлаһын: йәшәү ләззәтен аңларһың.

▸ Тормоштан гел ләззәт алам, күңел асам, тип ынтылма - балға батҡан себен хәлендә ҡалырһың.

▸ Аҡыллымын, үҙ аҡылым үҙемдә, тип маһайма - яңғыҙлыҡта ҡалып тилмерерһең.

▸ Фани донъяны гөл баҡса тип фекер ит - һәр саҡ һыу һибеп, тәрбиәләп тор.

▸ Бөтә эштәрҙе лә алған белемеңә таянып эш ит - емерек өйҙә йәшәүсегә оҡшауҙан һаҡлан.

▸ Ваҡ эштәрҙе һанла, сөнки улар ҙур эштең нигеҙе.

▸ Кешегә эште өйрәт, башлап эшләп күрһәт, әммә теүәлләмә - һиңә һалыныусылар күбәйер.

▸ Һәр эштә лә үҙ башың булһын, кеше башына һалынһаң, йоҙроҡтар "икмәк шүрлеге"ңә йыш менеп төшөрҙәр.

▸ Берәйһенең йомошон үтәй алмаһаң, икенсе кешегә өйрәтеп ебәрмә - эт һөсләтеүгә тиң була.

▸ Һүҙҙең мәғәнәһен һәм ҡәҙерен, тейешле урынын белеп ҡуллан - урынһыҙ әйтелгән ауыр һүҙ, ут иреткән ҡоростай, йөрәкте яндыра, киҫәктәргә бүлгеләп сәсрәтә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы Байым ауылы.**

***✓ Аҫаба башҡорттарҙың шәхси ерҙәре элеккесә үлсәнмәй-билдәләнмәй тәбиғи ыҙандары менән тиндәргә генә һатып алынған, йәғни 5 мең дисәтинә ер һатып алып, 10 мең дисәтинәһе тартып алынған.***

*БУЛҒАН ШУНДАЙ ЗАМАН*

# БАШҠОРТТАР ТУРАҺЫНДА...

## тарихи-географик белешмә

* * *

"...Хәҙерге башҡорттарға ҡарап, уларҙың ҡыйыу, көслө һәм һуғышсан халыҡ булыуын күҙ алдына килтереүе лә ауыр. Ниндәйҙер 100-200 йыл эсендә генә рус йоғонтоһо, көнкүреш һәм йәшәү шарттарының үҙгәреүе уларҙан бөтөнләй икенсе кеше яһаған.

Башҡорттарҙың айырым ырыуҙары үҙҙәренең иҫәпһеҙ-һанһыҙ көтөүлектәре менән киң башҡорт ерҙәрендә йәшәгән. Улар менән борондан килгән йолалар нигеҙендә кенәз һәм халыҡ йыйыны идара иткән.

Рус дәүләтен емергән монгол-татар ғәскәрҙәре башҡорттарға яһаҡ һалған, әммә уларҙың эске донъяһына ҡыҫылмаған...

Һуңғараҡ улар тормошона рус батшалығы килеп ингән... Ҡаҙанды алғандан һуң, башҡорттар күршеләренең ҡыҫырыҡлауына түҙмәй, урыҫ батшаһына үҙҙәре барып ҡушылған.

Иоанн башҡорт кенәздәренә ер менән идара итеү хоҡуғы биргән грамоталар тапшырған, дошмандарҙан һаҡларға һүҙ биргән, бары тик төрлө ташламалар яһап, яһаҡ түләргә ҡушҡан. Был ерҙәр Мәскәү батшалығы эҙәрлекләүенән ҡасыусылар өсөн оҙаҡ ваҡыттар йәшеренер урын булған. Бында шулай уҡ татар-монголдар ҡолатҡан батшалыҡтарҙан сығыусылар Ислам динен таратыр өсөн килгән. Улар тирә-йүндәге бөтә мосолмандарҙы Рәсәйгә ҡаршы күтәрергә тырышып, халыҡты үҙҙәренең өгөт-нәсихәтте менән ҡуҙғытҡан. Шуға күрә лә тәү башта баш күтәреүҙәр бойондороҡһоҙ Башҡортостанды тергеҙеү өсөн ихтилал характерын йөрөткән...

... XVIII быуат аҙағына баш күтәреүҙәр характеры үҙгәргән. Үҙаллылыҡ тураһында һүҙ йөрөтөү бүтәнсә мөмкин дә булмаған; тәүге планға ер мәсьәләһе сыҡҡан.

... 1736 һәм 1739 йылдарҙағы указдар "баш күтәреүсе" башҡорттарҙың ерҙәрен бушлай алырға рөхсәт биргән, был төрлө аңлашылмаусанлыҡтарға сәбәпсе булып торған.

Ул заманда закон эштәре формаль яҡтан һәр ваҡыт камил булмаған: канцелярия буталсыҡтарынан, ҡағыҙ эшенән һатыусылар ҙа, һатып алыусылар ҙа ҡурҡып торған. Шуға күрә башҡорт ерҙәрен оҙайлы ваҡытҡа ҡуртымға алыусыларҙың хоҡуғы буталсыҡ һәм аңлайышһыҙ хәлдә ҡалған: был ерҙәрҙе башҡорттар элек-электән биләгән, ата-бабалары ошонда йәшәгән, ә уны дәлилләүсе бер ниндәй ҙә ҡағыҙ булмаған.

XVIII быуатта бөтә ерҙә әүҙем рәүештә заводтар төҙөлә башлағанда, Башҡортостанда руда ятҡылығы табылған. Шул ваҡытта завод өсөн биләмәләр йыртҡыстарса юлдар менән яуланған, башҡорттарҙың белемһеҙлеге менән файҙаланып, әллә күпме меңдәрсә майҙан ерҙәр тиндәргә генә һатып алынған...

Яңы төҙөлгән заводтарға эргә-тирәләге ауылдарҙы беркетеп, заводта эшләтеү һәм алпауыт ерҙәрен эшкәртеү өсөн тотош халыҡты алып килгәндәр. Башҡорт ерҙәре халыҡ ҡулынан тартып алына барған, һөҙөмтәлә улар үҙаллылығын юғалтҡан. Баш күтәреүҙәр бер-бер артлы ҡабатланған, хәҙер инде башҡорттар ғына түгел, рус крәҫтиәндәре лә борсола башлаған, быларға ҡарата яза ла ҡаты булған; халыҡты баҫтырыу өсөн ғәскәр саҡырылған, ауылдар яндырылған, ғәйеплеләр язаға тарттырылған, Себергә оҙатылған, ирке сикләнгән. Был ваҡиғалар азат, бай, аңлы һәм ғорур башҡорт халҡы баҫылғансы , бахыр, ярлы хәленә ҡалғансы дауам иткән. Ул элек юл булмаған, етәкселек дингә ҡыҫылмаған, яһаҡ тиәндәргә генә һатыуға рөхсәт биргән указ сыҡҡан, тик был ваҡытта инде халыҡ ерһеҙ ҡалған булған.

...Башҡорттар, шулай итеп, тулыһынса таланған. Яңы шарттарға улар ҡулайлашып китә алмаған: 15 дисәтинә ере булған крәҫтиән арыу ғына йәшәп китер ине лә бит, тик башҡорт яртылаш күсмә халыҡ булараҡ, уның йөҙәр йылдар буйына һалынған холҡо, ғәҙәттәре тиҙ арала ғына үҙгәрә алмаған. Иркен ерҙәр күләме кәмегәс, башҡорттарҙа йылҡысылыҡ менән шөғөлләнеүселәр ҙә аҙайған. Урмандар ҡырҡылып, халыҡ күбәйгәс, солоҡ ҡуйыу мөмкинлеге лә булмай башлай. Борон иһә башҡорттар үҙ тамғалары менән урман буйяҡ күршеләрен йыйып, оло табын ҡороп, ҡымыҙ эскәндәр, тәмле-татлы башҡорт ризыҡтары менән һыйланғандар...

...Башҡорттоң оҙайлы ҡышҡы йонсоуҙан һуң шул тиклем күп итеп майлы һарыҡ итен ашай һәм ҡымыҙ эсә алыуына хайран ҡалырлыҡ. Шулай ҙа былай ашау зыян килтермәү генә түгел, хатта файҙалы ла булған: ҡымыҙ эсеү һәм һарыҡ итен ашау башҡорттарҙың ҡышын кәмегән кәрен бер нисә аҙна эсендә күтәргән (хәҙер Урта Рәсәйҙән башҡорт далаларына ҡымыҙ эсер өсөн махсус рәүештә сирлеләр ебәрелә, күптәре тиҙ үк һауыға).

Башҡорттарҙың көсһөҙлөгө һәм хәлһеҙлеге йәйләүгә сыҡҡас тиҙ үтә - улар тағы дәртле, һорап бер кем дә борсомаған мөлдәрҙе һағынып иҫкә алған.

Пугачев ихтилалы һуңғы иң көслө күтәрелеш булып торған, унда башҡорттар әүҙем ҡатнашып, бының өсөн ҡаты язаға дусар була. Ҡасандыр башҡорттарға ҡараған ерҙәр шәхси хужаларға, крәҫтиән ойошмаларына һәм ҡаҙна ҡулына күскән. Бындай ирекле һәм ирекһеҙ күсерелештәр, ерҙәрҙе һатып та, талап та алыуҙар, ҡапма-ҡаршылыҡлы указдар арҡаһында ергә хоҡуҡ һәм ер мөнәсәбәттәре шул тиклем буталған, әле һаман күп ерҙәр өсөн низағтар дауам итә.

Ер мөнәсәбәттәрен яйға һалыу өсөн башҡорттар ҡулында ҡалған ерҙәр түбәндәгесә бүленгән: башҡорт ер хужаларына 15-әр дисәтинә, "припущенник"тарға йән башына 30-ар дисәтинә бирелгән, ә ҡалған ерҙәр аҫаба башҡорттарҙың шәхси ерҙәре итеп ҡалдырылған. Тик был ерҙәр генә башҡорт йәмғиәттәре ҡарары буйынса һатыла алған. Запас ерҙәр ерһеҙ ҡалған йәки ере аҙ булған припущенниктарҙы тәьмин итеү өсөн Дәүләт милке министрлығы ҡарамағына тапшырылған.

Әммә тиҙҙән (1871) крайҙа рус йоғонтоһон көсәйтеү өсөн запас ерҙәрҙән отставной чиновниктарға 150-1500 дисәтинә, ә хеҙмәткәрҙәргә, дәрәжәһенә ҡарап, тағы ла күберәк майҙанда ер биреү кәрәкле тип табылған. Был ерҙәр бик түбән хаҡҡа 37 йыл дауамында түләүгә бирелгән. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Ырымбур губернаһының бөтә запас ерҙәре һәм Өфө губернаһының күпселек өлөшө тартып алынған. Аҫаба башҡорттарҙың шәхси ерҙәре элеккесә үлсәнмәй-билдәләнмәй тәбиғи ыҙандары менән тиндәргә генә һатып алынған, йәғни 5 мең дисәтинә ер һатып алып, 10 мең дисәтинәһе тартып алынған.

Ниһәйәт, 1882 йылда башҡорт ерҙәрен ҡаҙнаға һәм крәҫлап солоҡ умарталары ҡуйып сыҡҡан, һәм уларға хужа менән айыуҙан башҡа бер ни ҙә теймәгән. Хәҙер урманда йәнлектәр ҙә кәмегән.

Шулай итеп, башҡорт халҡының элекке шөғөлдәре юғала барған, ә игенселеккә улар әле күнекмәгән. Шуға ла бөтөнләй малы булмағандарға алпауыттарға батраклыҡҡа, һал ағыҙыуға, приискыға һәм заводҡа эшкә барыуҙан башҡа сара ҡалмаған.

Тау башҡорттары болондар буйлап бәләкәй генә йәйге өйҙәр төҙөп ҡуйған. Тирмә һымаҡ ул өйҙәрҙе үҙең менән килтереп ҡуйыу ҡыйынлыҡ тыуҙырмаған: түңәрәк ағас рәшәткәләргә уртаһында төтөн сығыу өсөн тишек ҡалдырып, кейеҙ ябылған һәм торлаҡ әҙер булған. Тирмә уртаһында балсыҡтан эшләнгән усаҡта ут яғылған. Йәйләүгә сыҡҡанда кейеҙҙән тыш, үҙең менән иң ныҡ кәрәкяраҡ ҡына алып киленгән һәм көтөү ҡыуылған. Хәйер, ҡышҡы торлаҡ та артыҡ йыһазландырылмаған: иҙәнһеҙ, түбәһе насар ғына ябыулы бүрәнә өйҙөң уртаһында тура торбалы сыуаллы усаҡ торған. Уның өҫтөнә ҡаҙан ҡуйылған, иҙәндә - һандыҡтар, яҫтыҡ, түшәктәр урынлашҡан. Тәҙрә ҡарындыҡ менән көпләнгән.

...Йәйләүгә күсенгәс, улар тәүге ваҡытта ашай ҙа йоҡлай торған булған. Көтөү артынан артыҡ ҡарарға кәрәкмәгән: улар йәйләү тирәләй тибенлектә йөрөгән, бейәләр ҡолонсаҡтары янына үҙҙәре килеп, имеҙеп киткән. Һыйыр һәм һарыҡтарҙы ҡатындар ҡараған. Улар иртә таңдан тороп, һыйыр һауған, һауыт-һаба йыуған, мал-тыуар тәрбиәләгән. Ирҙәр иһә һуң ғына тороп, бер тирмәнән икенсеһенә барып, ҡош һайрауын тыңлап, ҡымыҙ эсер булған. Башҡорттар ҡунаҡтарҙы, бигерәк тә алыҫтан килгәндәрҙе ихлас ҡаршы алған, һарыҡтары булһа, шундуҡ салып, бешерергә ҡуйған. Тирәйәнле, күңелле: һәм тик ошонда улар үҙҙәренең ғәйрәте, уйлап табыу һәләте, тапҡырлығы менән бер аҙ үҙҙәренең ата-бабаларын хәтерләтә.

Йәйләү урынында йәйге байрам-йыйын да уҙғарыла: мәжлес, йырлау, бейеүҙәр, бүләккә көрәшеүҙәр, ат сабыштары ойошторола. Бүләккә ниндәй ҙә булһа яулыҡ йәки башҡа ваҡ-төйәк тәғәйенләнә, һәм уны еңеүсегә иң матур ҡыҙ тапшыра. Йәштәр төркөм-төркөм булып сатырҙар буйлап хужаларҙы ҡотлап йөрөй; бөтә ерҙә ҡунаҡтарҙы һыйлайҙар, йәғни алһыҙ-ялһыҙ тағы ла ашайҙар һәм эсәләр.

Сауҙагәрҙәр, йәрминкәгә килгән кеүек, был байрамға тәмле-татлылары һәм емештәре менән күсеп килә: күп халыҡ йыйыла. Мосолман ҡанундары буйынса тыйылған шарап, араҡыларҙы ла килтерәләр...

...Йәй үтә һәм көҙгөһөн башҡорттар тағы ла үҙҙәренең ҡышҡы торлағына ҡайта.

Әлбиттә, былай итеп тик мал көтөүҙәре һәм ерҙәре булған хәллеләр генә йәшәй алған. Уларға бындай күсеп йөрөүҙәр ысынлап та кәрәк булған, сөнки, ғәҙәттә, һөрөлгән ерҙәр һәм сабынлыҡтар ауылдан алыҫта урынлашҡан булған, ә көн һайын унар саҡрым алыҫлыҡҡа эшкә йөрөү мөмкин түгел.

Ярлылар йыл буйына эш эҙләп, тегендә-бында йөрөйҙәр.

Бай башҡорттар үҙҙәре сығып йөрөмәйҙәр, сөнки улар ҡышҡыһын да өйҙә арыу йәшәйҙәр, ә көтөүҙе утлауға хеҙмәтселәр менән дә ебәрергә була.

...Дин буйынса башҡорттар мосолман, уларҙың йолалары дөйөм мосолмандарҙыҡы кеүек. Мәсет ҡарамағында мәҙрәсәләр бар, унда мулла балаларҙы Ҡөрьән уҡырға өйрәтә. Шулай ҙа хәҙер уларға урыҫса уҡый-яҙа белеү файҙалыраҡ булыр ине; башҡорттар урыҫтар менән алыш-биреш итә, уларҙа эшләй һәм, әлбиттә, уҡый-яҙа белеү, һанау һәм урыҫ ҡағиҙәләре менән танышыу уларҙы күп алданыуҙарҙан һаҡлап ҡалыр ине.

...Уларҙың тарихи йырҙарында һәм риүәйәттәрендә икенсе, үткән тормоштоң шаңдауҙары яңғырай. Мәҫәлән, яратҡан башҡорт батыры Салауат тураһында йырҙар шундай...

...Һирәк булһа ла боронғо йырҙар йырланыла, иле, азатлығы өсөн көрәшсе, батыр образы халыҡ хәтерендә тоноҡлана бара. Замана йырҙары моңһоу, зарлы, уларҙа башҡорт тормошоноң төрлө етешһеҙлектәре йырланыла..."

***(Урал/ Сост. Т.Л.Хитрово. - М.: Издание Т-ва И.Д.Сытина, 1905. Издание осуществлено Географической комиссией Учебного отдела Общества распространения технических знаний).***

**(Аҙағы. Башы 41-се һанда).**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**XIX быуат дауамында - XX быуат башында рус тикшеренеүселәре: тарихсылар, ер үлсәүселәр, табиптар, чиновниктар аша башҡорттар һәм Башҡорт ере тураһында бик күп мәғлүмәттәр йыйылған. Башҡорттар тарихи процестарҙың әүҙем ҡатнашыусылары була: юҡҡа ғына Башҡортостанда булып үткән хәлдәргә Рәсәй тарихы буйынса Н.М. Карамзин, С.М. Соловьев кеүек ҙур тикшеренеүселәр яҙған дөйөмләштерелгән хеҙмәттәрҙә аҙ биттәр бүленмәгәндер. Шуның менән бергә, һәр дәүерҙә тикшеренеүселәрҙең башҡорт тарихына ҡарашы үҙгәргән: кемдәрҙер халыҡтың батыр үткәненә, уның яу яланында ҡыйыулығына һоҡланған, бер-бер артлы булып торған бөтмәҫ башҡорт ихтилалдарындағы ныҡышмалығына аптыраған, ә кемдәрҙер мәрхәмәт һәм йәлләү күрһәткән, хатта XIX быуат аҙағында - XX быуат башында 60-сы йылдарҙағы крәҫтиән, административ реформалар һөҙөмтәһендә туранан-тура нәфрәткә тиклем барып еткән. Шулай XIX быуатта халыҡ төшөнкөлөк хәленә алып барып еткерелә.**

**Үрҙә рус ғалимдары, публицистары һәм яҙыусыларының әҫәрҙәренән килтерелгән өҙөк һәм өҙөмтәләр аша рус фәне һәм әҙәбиәте тарафынан нимә эшләнгәне ҡарап үтелә. Һығымталарҙың үҙенсәлеге һәм авторҙар һүҙҙәре күбеһенсә уларҙың алдына ҡуйған бурыстарына, социаль статусына, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарҙы ни тиклем тәрәндән асыҡлауына ҡайтып ҡала. Шулай ҙа бында яҙылғандар, ҡайһы бер урындары улай уҡ хәҡиҡәткә тап килмәһә лә, рус тикшеренеүсеһе күҙлеге аша башҡорттарҙың ата-бабаларына күҙ һалыу өсөн етерлек һүрәтләнеш бирә, сөнки ваҡыты-ваҡыты менән һәр халыҡ үҙенә бүтәндәр күҙҙәре менән бағып алырға тейеш. Юғалмаҫ өсөн...**

**(Роза Буканова, Вячеслав Фешкин. "Башҡорттар рус ғалимдары һәм тикшеренеүселәре хеҙмәттәрендә" китабынан).**

***✓ Күренекле япон ғалимы, профессор Кадзуюки Танимото иҫәпләүенсә, оҙон көй донъя халыҡтары мәҙәниәтенең оло ҡаҙанышы һәм оҙон көйҙөң эпицентры-үҙәге - Башҡортостанда.***

# ЯРАЛҒАН ЕР – УРАЛТАУ,

## Уралтау бейеклегенән...

**Р. ШӘКҮР:** "Урал батыр" эпосы - Уралтау һәм Шүлгән мәмерйәһе менән ерлекле әҫәр, уны башҡа урынға һәм башҡа халыҡҡа бер нисек тә алып барып ялғап булмай.

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** "Урал батыр" эпосын Мөхәмәтша Буранғолов үҙе яҙған бит", тиеүселәргә мин шулай тип яуап ҡайтарғайным: "Мөхәмәтша Буранғолов шундай әҫәрҙе яҙған икән, ул бит бәйғәмбәрҙәр дәрәжәһендәге даһи булған...". Ысынында иһә, М. Буранғоловтың ике сәсәндән ошо эпосты отоп алып, яҙып алып ҡалыуы даһилыҡҡа тиң. Әгәр ҙә ул форсатын табып, ошо әҫәрҙе яҙып алмаһа, ул яйлап юғалыр, совет осоро уны онотторор ине бит.

**З. ӘМИНЕВ:** Ҡөрьәндә донъяның нисек барлыҡҡа килеүе, кешенең яралыуы, ике донъялағы күренештәр бәйән ителә. "Урал батыр" эпосын башҡорт халҡының Ҡөрьәне тип тә атарға була хатта.

"Урал батыр"ҙы күпселек уҡыусы әкиәт кеүек ҡабул итһә лә, унда ла шул уҡ донъяның һәм кешенең барлыҡҡа килеүе, изгелек менән яуызлыҡ көрәше, ике донъя күренештәре һүрәтләнә бит. Унда әхлаҡ мәсьәләләре лә күтәрелә. "Урал батыр" эпосын башҡорт халҡының Ислам дине барлыҡҡа килгәнгә тиклемге Ҡөрьәне тип тә атарға була хатта, сөнки унда боронғо ата-бабаларыбыҙҙың донъяуи ҡараштары үҙенең тулы сағылышын тапҡан.

**Р. ШӘКҮР:** Шуның өсөн дә Ҡөрьәнде ҡабул иткәндән һуң "Урал батыр" эпослы башҡорт рухи яҡтан икеләтә байып китә.

**▸ Тимәк, "Урал батыр" эпосын да беҙ мөғжизәләребеҙҙең тәүге етәүһе исемлегенә индерәбеҙ. Артабан киттек. Ҡурайыбыҙ менән моңобоҙ - халҡыбыҙҙың булмышын тәшкил итеүсе ике мөғжизә. Шулай түгелме?**

**Ю. ҒӘЙНЕТДИНОВ:** Ҡурай мәшһүр "Урал батыр" эпосы кеүек, башҡорт халҡының рухи булмышын сағылдырған ҡомартҡы. Ҡурай моңонда эпик ҡоласлы яңғыраш бар. Ҡымыҙ, ҡурай моңон тыңлағанда, ысын башҡорт ҡымыҙы булып тән-тамырҙарға тарала. Башҡорт кейеҙенә ултырып, башҡорт балын тәмләп сәй эскәндә, ҡурай моңо, оҙон көй ҙә яңғыраһа, ожмах ситтә торһон. Әйткәндәй, оҙон көйҙәребеҙ, боронғо йырҙарыбыҙ ҡурай моңо менән һуғарылған. Ҡурай булмаһа, оҙон көй ҙә булмаҫ ине. Ҡурай моңо аша беҙ Ямантау, Ирәмәл һәм башҡа тәбиғәт ҡомартҡыларының, ғөмүмән, Урал тауҙарының күҙ күрмәгән матурлығын күрәбеҙ, был изге урындарға бәйле тарих күҙ алдына килеп баҫа. Уралды тулы мәғәнәһендә Урал иткән - ҡурай. Ҡурайҙы ҡурай иткән - ҡурайсылар, башҡорттоң талантлы улдары. Ҡурайҙың иҫ киткес рухи потенциалын Башҡортостанда йәшәгән халыҡтар яҡшы аңлай. Башҡортостан Республикаһының Дәүләт символдарына конкурс иғлан ителгәндә, бөтә эскиздарҙа ла (!) ҡурай булған. Шуларҙың береһе символикаға әйләнде. Йәғни, ҡурай Башҡортостанда йәшәгән халыҡ вәкилдәрен берләштереүсе символ булараҡ та - оло мөғжизә.

**Р. ШӘКҮР:** Ҡурай һәм оҙон көй беҙҙе милләт итеп йәшәткән рухи күренештәр. Улар, бәлки, бер үк осорҙа барлыҡҡа килгәндер. Башҡорттоң оҙон көйө, күрәһең, халыҡтың тарихы менән бергә үрелеп барғандыр. Халыҡ ниндәй рухи үҫеш юлы үтһә, уның моңона ла шуның рухы һалынған да ҡуйған. Шуны ҡурай моң аша донъя менән тоташтырып ҡуйған. Ҡурай башҡорттоң рухын күк менән тоташтырған, ер менән күкте бер иткән. Уның тауышында Урал батырҙың рухын тойоп була. Беҙҙең йырҙарыбыҙ рухы һәм тарихы менән көслө. Башҡорт бар тарихын, кисерештәрен, хыялын һәм азатлыҡ рухын шунда һалған. Мәңгелектә йәшәй торған халыҡтың рухы беҙҙең йырҙар аша әйтеп бирелгән, ҡурай аша яңғыраған, моңға әүерелгән.

Рәшит Мырҙагилдиндең башҡорт солоғо тураһындағы китабын уҡыным. Ул китапта ҡурай ҙа, бал ҡорто ла, солоҡ та бер тамырҙан килгәнлеге тураһында әйтелә. Автор ҡурайҙың башҡортҡа солоҡсолоҡ аша килеп инеүен раҫларға ынтыла. Солоҡсолар ҡурай үләнен умарта йә ағас ҡыуышы эсенә төтөн өрөр өсөн ҡулланған да, шул саҡта тауыш килеп сыҡҡан, тип фаразлай. Бында бал ҡорто, ҡурай мөғжизәһе бергә килеп тоташа. Бында солоҡсолоҡтоң да, ҡурайҙың мөғжизәле булыуы аңлатыла.



**З. ӘМИНЕВ:** Беҙҙең оҙон көй иң боронғо дәүерҙән башлап, өҙөлмәйенсә килгән. Был, әлбиттә, мөғжизә. Япондарҙа ла бар оҙон көй, әммә уларҙа ярсыҡтары ғына һаҡланған. Беҙ фольклорҙа боронғо тамырҙы таба алабыҙ, шуның кеүек башҡорт моңонда ла шул тамырҙы өйрәнергә тейешбеҙ. Бер мәл армияла ашханала Мәскәү радиоһынан концерт тыңлай-тыңлай ашап ултыра инек, ҡапыл "Ҡарабай" көйө яңғырай башланы. Шул саҡ һалдаттарҙың бер нисәһе, ашауын онотоп, бейергә төштө лә китте. Улар был көйҙөң ниндәй халыҡтыҡы икәнен дә белмәй, әммә бейей. Ә мин күҙҙәремде йомдом да, уйҙарым менән Ирәндек тауҙарына киттем. Казармаға ҡайтҡас, мандолинала ошо көйҙө уйнап күрһәтеп, хеҙмәттәштәремде "Ҡарабай" ҙың башҡорт моңо икәненә ышандырҙым. Ниндәйҙер сит милләт егеттәренең күкрәгенә бейеп китерлек дәрт ҡундырырлыҡ булғас, тимәк, был көйҙөң дә боронғолоҡҡа бәйле рухы бар.

**Ю.ҒӘЙНЕТДИНОВ:** Оҙон көй хаҡлы рәүештә башҡорт халҡының музыкаль-поэтик классикаһы һанала. Оҙон көй ҡурай моңо менән һуғарылған, уның нигеҙендә ҡурай моңо ята һәм уны ижад итеүселәр башлыса ҡурайсылар. Оҙон көйҙә халҡыбыҙҙың үткәнен, бөгөнгөһөн һәм киләсәген дә күҙаллап була, ул йөкмәткеһе, киңлеге, тәрәнлеге, тарихты һөйләүе менән эпик әҫәргә тиң. Миҫалға "Урал" йырын алайыҡ, унда халҡыбыҙҙың бар тарихы һыйған. Оҙон көй, термин булараҡ та, донъя халыҡтары мәҙәниәтенә "башҡорт халҡының оҙон көйө" тип ингән. Донъя ғалимдары был терминды тик башҡорт халҡының оҙон көйҙәренә ҡарата ҡуллана. Күренекле япон ғалимы, профессор Кадзуюки Танимото иҫәпләүенсә, оҙон көй донъя халыҡтары мәҙәниәтенең оло ҡаҙанышы һәм оҙон көйҙөң эпицентры-үҙәге - Башҡортостанда. Танимото беҙгә: "Халҡығыҙҙың тарихын юғалтмайбыҙ, тиһәгеҙ, оҙон көйөгөҙҙө өйрәнегеҙ", - тине.

**▸ Ҡөрьәндә "Ән-нәхл" (Бал ҡорто) тигән сүрә бар. Аллаһы Тәғәлә ошо бал ҡорттарын барлыҡҡа килтереп, кешелеккә шуны әйтә: "Һеҙ ҙә ошо бал ҡорттары кеүек, берҙәм һәм тырыш булһағыҙ, камил йәмғиәттә матур тормош ҡороп йәшәй алырһығыҙ". Донъяла "Башҡорт балы" феноменының нигеҙен дә башҡорт тоҡомло бал ҡорто тәшкил итә.**

**Р. ШӘКҮР:** Мөғжизә итеп балды түгел, бал ҡортон күрһәтеү дөрөҫөрәк булыр. Сөнки балды бал ҡорто йыя бит. Икенсенән, бал ҡортон башҡорт үҙенең йәшәү өлгөһө булараҡ һаҡлаған, үҫтергән. Әйтәйек, шул уҡ башҡорт аты. Был тоҡомдо башҡорт нәҫелдән-нәҫелгә камиллаштырып килгән. Бал ҡортонда ла башҡорттоң асылы сағыла. Ҡөрьәндә әйтелгән йәшәү рәүеше арҡаһында башҡорт үҙе лә, бал ҡорто ла шундай үҫеш алған һәм ошо бөгөнгө сифаты дәрәжәһенә еткән.

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Бал ҡорто ла, ат тоҡомо ла башҡорт атамаһына бәйле, уның менән йәнәш ҡуйылып, башҡорт тоҡомло ат, башҡорт бал ҡорто, тип атап йөрөтөлә. Был да үҙенә күрә мөғжизә. Башҡорт шул тоҡомдағы бал ҡортон да, атын да һаҡлай һәм үҫтерә белмәһә, улар юҡҡа сығыр йә булмаҫ ине. Үләндәрҙең күп төрлөлөгө лә башҡорт үҙ ерен һаҡлап алып ҡалыуҙан килә бит.

**▸ Уралтауҙы, "Урал батыр" эпосын Шүлгәнташ мәмерйәһенән айырып ҡарап булмай. Журналист Сәлимйән Бәҙретдинов үҙенең беҙҙең гәзиттә баҫылған "Шүлгәнташ" (11-се һан) хеҙмәтендә был бәйләнеште шулай аңлата: "...Шүлгәнташ мәмерйәһе һәм уның тирә-яғы менән "Урал батыр", "Аҡбуҙат", "Минәй батыр менән Шүлгән" эпостары, күп кенә риүәйәттәр, легендалар бәйле. Яҡындағы Шүлгән күленән йылҡы өйөрөн эйәртеп, Аҡбуҙат сыҡҡан. Шунлыҡтан уны Йылҡысыҡҡан күле лә тиҙәр. Күлдең ярында Уралдың бүләһе Һәүбән Шүлгәндең һылыу ҡыҙы Нәркәсте сәсенән урап тотҡан һәм аҙаҡтан буй бирҙергән. Мәмерйә йәнәшенән Уралдың оло улының исеме менән аталған Ағиҙел (Иҙел) йылғаһы аға. Бында йөҙйәшәр ҡарағайҙар, имәнлектәр, тауҙар, ҡаялар, үҙәнлектәр, хуш еҫле болондар, таҙа һыулы йылғалар, шишмәләр, бөтә донъяға билдәле солоҡ ҡорто... Шүлгәнташ урынлашҡан Башҡорт дәүләт ҡурсаулығы биләмәһе йәннәттәй ер, донъя, илгиҙәрҙең күңеленә ифрат та хуш". Эйе, был мәмерйәнең мөғжизә икәнлеген хәҙер бар донъя белә. Ә беҙ уны башҡорттоң тәүйорто итеп беләбеҙ, сөнки ата-бабаларыбыҙ унда үҙ эҙҙәрен, үҙ тамғаларын, үҙ ҡултамғаһын ҡалдырған...**

**З. ӘМИНЕВ:** Вячеслав Котов тигән ғалимыбыҙ "Урал батыр" эпосын Шүлгәнташ мәмерйәһе менән бәйләп хеҙмәт яҙҙы. Минең дә бының буйынса үҙ фекерҙәрем бар. Минеңсә, Шүлгән һүҙенең "Шүл" өлөшө "һул яҡ" тигәндән киләлер. Шүлгәнде "һыу" менән, йәғни "һыу батшалығы" менән дә бәйләүселәр бар. Баймаҡ районында Шүлкә атамаһындағы йылға һәм ауыл бар. Шүлкә Йылайыр йылғаһына һул яҡтан ҡойған өсөн шулай аталған. Тюркологтар урыҫтың "Шульгин" тигән фамилияһының да "левша" тигәндән килеп сыҡҡанлығын иҫбат итте. Ошоларҙан сығып ҡарағанда, "Урал батыр" эпосындағы Шүлгән "һул", йәғни "теге донъяның батшаһы, ханы", тигәнде аңлата. Ә Урал - яҡты донъяның батшаһы һәм ханы.



**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Алтай халыҡтарында, яҡуттарҙа ла бар Шүлгән. Уларҙа Шүлгән "үлгән" тигән мәғәнәне аңлата тип әйтелә. Тимәк, "һул" һәм "үлгән" һүҙҙәре бер үк тамырҙан. Ғөмүмән, Шүлгән мәмерйәһенең асылыр серҙәре бихисап. Уның мөғжизәле булыуының бер яғы - мәңге асылып бөтмәҫ сер, хазина һандығы булыуында.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәбеҙҙән шул асыҡлана: беҙ, ысынлап та, бихисап мөғжизәләр илендә йәшәйбеҙ икән. Мөғжизәләребеҙҙе, хазина-ҡиммәттәребеҙҙе һанаһаң - һандар, ул хаҡта һөйләһәң - көндәр-төндәр генә түгел, айҙар-йылдар ҙа етмәҫлек икән дә. Әле аҡһаҡалдарыбыҙ һәм арҙаҡлы шәхестәребеҙ әңгәмәһендә лә Башҡортостан мөғжизәләре исемлеген башлаусы етәүһе - башҡорт халҡы, Уралтау, "Урал батыр" эпосы, ҡурай, башҡорт халыҡ йыры, башҡорт бал ҡорто, Шүлгәнташ мәмерйәһе аталды, артабан һигеҙенсеһе, туғыҙынсыһы аталыр һәм ул ғәмәл, һис шикһеҙ, дауам ителергә тейешле.**

**Беҙ ул мөғжизә-хазиналарыбыҙҙы, ҡиммәттәребеҙҙе өйрәнә, гәзит уҡыусыларыбыҙҙы сәмләндерә торғас, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, уларҙа тарихыбыҙға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уята алдыҡ. Әлбиттә, күп кенә ҡиммәттәребеҙҙе бөтөнләйгә, ҡайһыһын өлөшләтә юғалтҡанбыҙ һәм уларҙы киренән ҡайтарыр өсөн бар эште шул мөғжизә-ҡиммәттәребеҙҙе барлауҙан башларға кәрәк икәнен аңланыҡ. Иң күп ҡиммәттәребеҙ совет осоронда юғалған. Тимәк, киләсәктә милләтебеҙ йәшәһен, тиһәк, шул мөғжизә-ҡиммәттәребеҙҙе һаҡларға бурыслыбыҙ.**

**Нисек кенә булмаһын, был рубриканы асып, барыбер дөрөҫ эшләгәнбеҙ, тибеҙ. Гәзит биттәрендә уҡыған һәр мәҡәләнән, телевизорҙан ҡараған һәр тапшырыуҙан һуң кемдер: "Ҡара, Башҡортостан мөғжизәләр иле икән дәбаһа!" - тип һоҡланыу белдергән икән, тимәк, беҙ ниндәйҙер кимәлдә маҡсатыбыҙға өлгәшкәнбеҙ. "Беҙҙең ауыл тирәләй генә лә 77 мөғжизә табып була", - тип һығымта яһаусылар, мөғайын, бер Бөрйән егете Илдар Абдуллин ғына булмағандыр.**

**Мөғжизәләр тураһында һөйләүҙе дауам итәбеҙ. Яңы рубриканы "Башҡортостандың 777... мөғжизәһе" тип атарға булдыҡ. Уның девизы: "Башҡортостаныбыҙҙы һәм халҡыбыҙҙы һаҡлап ҡалабыҙ тиһәк, ошо мөғжизәләребеҙҙе һаҡларға тейешбеҙ". Башҡортостан һәм башҡорт халҡы бер-береһенән айырылғыһыҙ төшөнсәләр. Уларҙың береһен һаҡлау, яҡлау икенсеһен яҡлауға һәм һаҡлауға тиң. Был - аксиома. Спартак уҙаман дөрөҫ әйтә: әгәр ҙә башҡорт халҡы ошо мөғжизәләр илен һаҡлар өсөн оло фиҙакәрлек, ҡаһарманлыҡ күрһәтмәһә, ҡорбандар бирмәһә, беҙ бөгөн ошо мөғжизәләргә ҡарап һоҡлана алыр инекме, әйтеүе ҡыйын. Һәр хәлдә, башҡорт халҡы ошо ерҙе тыуҙырмаһа ла, йәне ошо ерҙә яралғандан алып Уралтауына тоғро булып, уға ҡалҡан булып йәшәгән һәм йәшәй икән, ошо күренеш үҙе генә лә мөғжизә бит.**



**Әйҙәгеҙ, мөғжизәләр исемлеген башланыҡ, уны артабан тулыландырайыҡ. Был йәһәттән һеҙҙең ниндәй тәҡдимдәрегеҙ булыр, хөрмәтле гәзит уҡыусылар?**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ Тыныс ҡына йоҡлап ятҡан бүре балаларын күтәреп, йылғаны кисеп сыҡтылар ҙа, өң яғына табан ҡуҙғалдылар. Әхмәткә юл буйы арттарынан кемдер күҙәткән һымаҡ тойолдо.**





**СӘҒИТ АГИШ исемендәге хикәйәләр конкурсы**

## Әмир СӘЙФУЛЛИН

# ИНӘ БҮРЕ

### хикәйә



...Әхмәт бөгөн һуң ятты. Ҡараңғы төшкәнсе ихатала булышты. Күңелендә ниндәйҙер аңлайышһыҙ тойғо, хәүеф тә бар. Әсәләренән айырып алынған бүре балалары хәтеренә килеп тик торҙо. Әгәр ул иҫән булһа? Уларҙы зоопаркка һатыу күңеленә ятып бөтмәне. Бисәһе лә һаман мыжый.

- Уй, атаһы, ҡурҡам мин, - тип илауланы ул, бүре балаларын ҡайҙа олаҡтырыуҙарын белгәс тә.

...Төн уртаһы ауғас, йоҡомһорап барған Әхмәт ҡорт саҡҡандай һикереп торғанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Ҡолағына таныш түгел, ҡурҡыныс, шул уҡ ваҡытта һағышлы һәм үҙәктәрҙе өҙөрлөк тауыш килеп инде. Тыңлай биргәс, Әхмәттең аңына барып етте: был бит - балалары артынан килгән инә бүре олой! Өйҙәгеләр барыһы ла аяҡҡа баҫты. Олоу әленән-әле ҡабатланып тора.

- Әйттем бит мин һиңә, аңламаның, алйот! - тип Әхмәткә ябырылды ҡатыны.

Был олоуҙы тыңлап тыныс йоҡлау мөмкин түгел ине. Әхмәт йәһәт кенә кейенеп, мылтыҡ алды ла, тышҡа сыҡты. Олоу яҡында ғына, ауыл ситендәге ҡабаҡтан ишетелә. Мылтығын яһап, шул яҡҡа табан ике тапҡыр атты. Тауыш тынды. Бер аҙ көтөп торҙо, тик тауыш ҡабатланманы. Таң тыныс атты...

Иртәгәһенә бөтә ауыл буйлап хәбәр китте: Әхмәт урмандан бүре балаларын алып ҡайтҡан, инә бүре уларҙы эҙләп килгән...

- Инәләренә ҡайтарып бирергә кәрәк уларҙы, барыбер тынғы бирмәйәсәк. Йә атып үлтерергә, - тип һөйләнде ирҙәр.

- Нимәгә тейгән ул уларға, бар ауылға бәләһе! - тип ыуаланды бисәләр.

Әхмәттең бүре балаларын ҡайҙа иткәнен береһе лә белмәй ине әлегә.

Иртәгәһенә олоу тағы ҡабатланды. Әхмәт тағы сығып, атып, бүрене өркөтөп ебәрҙе. Унан һуң тағы... Ауыл ирҙәре лә, Әхмәтте һүгә-һүгә, мылтыҡ тотоп сыҡтылар, бүре балаларын кире ебәреүҙе талап иттеләр.

Был зил-зиләнең бишенсе көнөнә Әхмәттең өйөнә колхоз рәйесе үҙе килеп инде. Уңыш йыйыу барған ваҡытта йоҡолары ҡасҡан колхозсыларҙың ялыуҙары үҙенә үткәндер инде, ул һаулыҡ та һорашып тормай, Әхмәткә ябырылды:

- Әхмәт, һин урмандан бүре балалары алып ҡайтҡанһың, тиҙәр. Шул арҡала ауыл тирәләй инә бүре йөрөй, кешеләргә йоҡларға бирмәй икән. Теләһәң нишлә, бөгөн үк кире илтеп һал! Ҡурҡһаң, бүрене атып үлтер! Аңланыңмы, ахмаҡ!

- Улар юҡ бында... Бирҙем мин уларҙы... - тип ҡойолоп төштө Әхмәт.

- Кемгә бирҙең?

- Зоопаркка... - тип башын эйҙе Әхмәт, һәм, тотлоға-тотлоға, эштең нисек булғанын һөйләп бирҙе.

- Ах, был Кәрим! Тағы ниҙәр ҡыландыра, эшем әйһе! Күрһәтермен мин уға! - тип ҡыҙып китте рәйес. - Бына нимә, һунарсы остоғо! Һеҙгә теүәл бер тәүлек - теләһә ҡайҙан бүре балаларығыҙҙы табығыҙ! Тапмаһағыҙ, бүрене атып үлтергәнсе урманда төнәйәсәкһегеҙ! Аңлашылдымы?

Берәй сәғәттән Кәрим килеп етте. Ул да ағарынған, уҫал. Әхмәтте һыҙғырып ҡына саҡырып, ишекте асты:

- Ултыр! Киттек.

Райүҙәккә илткән юлға сығып алғас, ул һүҙ башланы:

- Һинең көсөктәрең менән бәйләнгән мин иҫәр! Шайтан ҡотҡоһо инде. Хужа тетмәне тетте генә!.. Һаман ҡалтырата. Тапмаһаҡ, эштән ҡыуам, ти. Бына бит, хатта машинаһын бирҙе.

Райүҙәккә был юлы тағы ла тиҙерәк барып еттеләр. Паркҡа килһәләр - зоопарк юҡ! Уның ҡасандыр булғанлығы ла һиҙелмәй хатта, һәммә ер тап-таҙа. Бер аҙ албырғап ҡарап торғас, Кәрим менән Әхмәт уҙып барған берәүҙән зоопарктың ҡайҙалығын һораныр. Өс көн элек ҡайҙалыр күсеп киткәндәр икән. Бер нисә кешенән һорап ҡараныр, ҡайҙа киткәндәрен береһе лә белмәне. Аптырағас, Кәрим йыраҡ түгел күренгән районсовет бинаһына йүгерҙе. Вахта артында ултырған ойоу ҡиәфәтле ҡарсыҡ уны күреү менән:

- Береһе лә юҡ, улым, - тине. - Барыһы ла район буйлап йөрөй, уныш йыйыу бит. Зоопаркты һорауға:

- Бында зоопарк та бармы ни? - тип һораны. Ҡул һелтәп, тышҡа сыҡҡас. Кәрим уйға ҡалды: зоопарктың ҡайҙалығын бында кем белеүе мөмкин? Әһә! Мәҙәниәт бүлеге бар ҙаһа.

Мәҙәниәт һарайында йәш кенә ҡыҙҙан башҡа кеше юҡ ине.

- Эйе, зоопарк булды беҙҙә, - тип эре генә яуапланы ул Кәримдең һорауына. - Бер ай булыйы булдылар. Ә ҡайҙа киттеләрме? Хәҙер... - Ҡыҙ ҡағыҙҙар араһында соҡсоноп, зоопарк киткән ҡаланың исемен атаны. Кәримдең иненән тау төшкәндәй булды.

- Ә һин беләһеңме - ул ҡала ҡайҙа? - тип бот сапты Әхмәт, ул әйләнеп килгәс. - Бынан йөҙ алтмыш саҡырымда!

- Ул турала уйлап торманым шул. Табыу мөһим ине, - тип уйға ҡалды Кәрим. - Нимә эшләйбеҙ инде хәҙер?

- Барырға кәрәк! Ул йыртҡысты беҙ бер нисек тә тотоп ата алмайбыҙ! - тигән ҡәтғи ҡарар сығарҙы Әхмәт. - Буш ҡул әйләнеп ҡайтһаҡ, нимә буласаҡ, беләһеңме?

- Аҡсаң бармы һинең? - тип һораны ҡапыл Кәрим. - Беҙ уларҙы һаттыҡ та һуң. Барып тапһаҡ, аҡсаны ҡайтарырға тура киләсәк.

- Юҡ шул. Өйҙә бар ҙа бит, үҙем менән юҡ, - тине ул төшөнкө генә.

- Нишләргә? - тип уйға ҡалды Кәрим. - Ярай, апайыма кереп сығайыҡ. Уның аҡсаһы була. Өйҙә торһа, бирер торор. Бензинға ла аҡса кәрәк әле.

Бәхеткә ҡаршы, Кәримдең апаһы өйҙә ине. Хәлде инәлесығалы аңлатып, Кәрим аҡсаһы кәсәһенә тығып ҡалды.

- Кәрим, тик ике генә көнгә, һөйләшкәнсә, - тип арттан ҡысҡырып ҡалды апаһы. - Был ялдарҙа мебель алабыҙ. Кәрәк буласаҡ!

- Ике көндән тип әйттем бит! - тип тайыу яғын ҡараны уныһы. Көн кискә һарҡҡайны, шуға тиҙ үк юлға сыҡтылар.

* * *

Был яҡҡа юл асфальт ине. Машина елдереп кенә бара, әллә ни хәрәкәт юҡ. Ярты юл самаһы үтелгәс, Кәрим ҡапыл тормозға баҫты. Сыҡты ла тәгәрмәстәрҙе ҡарай башланы. Уның артынан сыҡҡан Әхмәт артҡы һул тәгәрмәстең йомшайып ултырғанын күрҙе.

- Инде нишләйбеҙ? - тип ҡурҡып һораны ул. Кәрим асыуынан уртын ғына сәйнәне. Өс көн элек рәйес менән баҫыуҙар буйлап йөрөгәндә ошо уҡ тәгәрмәс тишелгәйне. Ул саҡта тиҙ генә алыштарғайны, ә бына запасын яматырға онотҡан. Алыштыр инде бына.

- Запасканы һүтә торайыҡ, бәлки, берәй изге кеше килеп сығыр, камера биреп торор, - тине ул ахырҙа.

Тишек камераны бер ҡулына тотоп, Кәрим юл ситенә баҫты ла, үткән машиналарҙы ауларға тотондо. Машиналар һирәк үтә, "Волга"лар бөтөнләй юҡ. Ҡара тәҙрәле бер-икәү генә выжлап үтеп китте.

- Начальство! - тип әсе һүгенде Кәрим. Байтаҡ торғас, улар ҡул һелтәп, юл ситендәге ташҡа ултырҙы. Шул саҡ Кәрим бик алыҫтағы боролошта аҡ "Волга" күреп ҡалды. Камераны тотоп, юлдың уртаһына уҡ йүгереп сыҡты. Иҫке генә "Волга" руле артында өлкән йәштәге ир ултыра ине. Янында ҡарсығы бар. Өҫтәге багажнигына, артҡы ултырғыстарға сумаҙандар тейәлгән. Ир кеше уларға өр-яңы камера сығарып тотторҙо, хаҡын да алып торманы. Бар бит шундай изге күңелле кешеләр.

Тәгәрмәсте тиҙ генә йыйып, һауа тултырып, артабан юлды дауам иттеләр. Тик ярты сәғәттән Кәрим тағы борсола башланы:

- Заправка кәрәк ине.

Тиҙҙән юл ыңғайында "Бензоколонка - 300 м" тигән билдә күренде. Унда килеп кергәс, "ГСМ ҡабул итеү. Тәнәфес" тигән яҙыу күрҙеләр.

- Күпме көтөргә! - тип тәҙрә аша һораны Кәрим.

- Сәғәт ярым, - булды яуап.

- Шайтан алғыры! - тип һүгенеп алды Кәрим. - Беҙҙе Аллаһы Тәғәлә шулай язалай ул, балаларҙы әсәләренән айырған өсөн!

Әхмәт өндәшмәүҙе хуп күрҙе. Кәрим былай тине:

- Ярай. Киттек. Икенсе заправкаға тиклем етергә тейеш. Көтөп ултырып булмай ҙа инде.

Киләһе заправкаһың ҡай тирәлә икәнен ул белмәй ине. Егерме саҡырымлап юл үттеләр, бер нәмә күренмәне. Тағы ла ун саҡырым - еҫе лә юҡ. Ҡапыл машина сөскөрә башланы һәм бөтөнләй туҡтап ҡалды.

- Килеп еттек, бөттө бензин! - Кәрим асыу менән рулде төйгөсләне. Нишләйһең, багажниктан канистр алып, тағы юл ситенә баҫырға тура килде. Кис төштө. Берәй сәғәт торғас, уларға бәхет йылмайҙы: яндарына йәш кенә водитель ултырған УАЗ килеп туҡтаны.

- Бир, әҙерәк ҡояйым, - тип килеп сыҡты ул. - Бынан заправка йыраҡ түгел, ун саҡырымлап ҡына.

Улар ҡалаға килеп ингәндә, ҡараңғы төшкәйне инде. Бер юлаусынан һорашып, зоопаркты эҙләп таптылар. Һуң булыуға ҡарамаҫтан, унда эш ҡайнай. Күрәһең, иртәгә асырға әҙерләнәләр. Эшселәрҙең береһе администратор урынлашҡан вагонға күрһәтте. Ишеген ҡаҡҡас, таныш ир пәйҙә булды:

- Нимә булды? Кем кәрәк? Ә-ә, был һеҙме ни? - Ул Кәрим менән Әхмәтте танып алды. Өҙә-йолҡа уға хәлде аңлаттылар.

- Дә, эштәр... Бүре лә, балалары ла йәл. Яҡшы түгел... - Тағы уйға батты ла, ҡапыл өҙә әйтте:

- Һуң, мин уларҙы һатып алдым бит!

- Аҡсаһын ҡайтарабыҙ беҙ, - тип дәррәү яуапланы Кәрим менән Әхмәт.

- Тороп торогоҙ, мин уларҙы урынлаштырмағанмын әле, үҙемдә тота инем, - тип эскә кереп китте лә, таныш ҡумтаны тотоп килеп сыҡты ир.

Ауылға ҡайтып еткәндә таң атҡайны инде. Ҡумтаны ҡыҫтырып, өйгә ашыҡтылар. Хужабикә тороп йөрөй. Көсөктәрҙе иҙәнгә ҡуйып, ирҙәр уйға батты. Тынлыҡты Кәрим боҙҙо:

- Уларҙы илтеп бирергә кәрәк. Нисек?

- Белмәйем, - тине Әхмәт шым ғына. - Ул мине һағалап торһа?.. Бәлки, ярҙам итерһең, ә?

- Нисек итеп? - тип аптыраны Кәрим.

- Әллә инде... Хәҙер, уйлап ҡарайыҡ.

Бер аҙ ултырғас, Әхмәт планын асып һалды:

- Былай. Бүре инәһе көндөҙ һунар итмәй, оломай ҙа. Тимәк, ҡайҙалыр боҫоп ята. Өңөндә түгелдер инде, унда балалары хәтере тынғы бирмәҫ. Әйҙә, былай итәбеҙ: мин көсөктәр менән ҡумтаны алам, ә һин минең арттан мылтыҡ менән ҡарауыллаһың. Бер-бер хәл булһа, атыр ҙа ҡуйырһың. Ата беләһеңме һуң?

- Белмәҫкә, - Кәрим үпкәләй яҙҙы. - Ә һин, Әхмәт, минең һунар бысағын ал. Кем белә...

- Ярар, - Әхмәттең ризалашмай сараһы юҡ ине. Йылғаға тиклем улар машинала төштөләр. Тыныс ҡына йоҡлап ятҡан бүре балаларын күтәреп, йылғаны кисеп сыҡтылар ҙа, өң яғына табан ҡуҙғалдылар. Әхмәткә юл буйы арттарынан кемдер күҙәткән һымаҡ тойолдо. Хатта ниндәйҙер ҡарашты арҡаһы менән тойған һымаҡ та ине ул. Әллә ҡурҡыу гәләмәте булды был...

Мылтыҡ тотоп арттан килгән Кәримдең ҡулдары ҡалтыраны, үҙе алан-йолан ҡаранды. Ниһайәт, өң янына килеп етте улар. Яңыраҡ ҡына үҙе иҫе лә китмәй тәмәке көйрәтеп ултырған төпһә янына еткәс, Әхмәт ҡумтаны уның өҫтөнә ултыртты ла, сигә бирҙе, унан ҡапыл артҡа йүгерҙе. Кәрим унан ҡалышманы. Улар йылға ярында ғына туҡтап тын алды. Оҙаҡ ҡына өндәшмәй ултырҙылар. Шунан Кәрим һорай ҡуйҙы:

- Ә һин нишләп теге ағай беҙгә бушлай камера, йәш егет бензин бирҙе тиһең, Әхмәт?

- Әллә, был хаҡта уйлап та ҡараманымсы, - тигән булды иптәше.

- Белмәйһең, белеп ҡуй, беҙ бүре балаларын әсәләре янына килтереп еткерһен өсөн Хоҙай ебәргән беҙгә ул кешеләрҙе...

- Ә-ә-ә...

Төн тыныс үтте. Бүре башҡаса оломаны.

**(Аҙағы. Башы 41-се һанда).**

ИЖАДХАНА

# ТУҒАН ТЕЛДӘ ТЫҢЛАНҒАН ӘКИӘТ...

## бала рухиәтенең нигеҙ ташы



**Алтынайҙың исеме "Тамыр" студияһының "Сәңгелдәк" тапшырыуы аша ла, "Һылыуҡай - 2004" конкурсының Гран-при яулаусыһы булараҡ та таныш. Байрас Ибраһимов һәм Әлмира Ҡыуатоваларҙың йырға-моңға ғашиҡ, рухлы, күркәм ғаиләһендә тыуып үҫкән ҡыҙыҡай үҙе лә әкиәт һылыуына оҡшап тора. "Мин үҙемде гел Һомай ҡош тип хис иттем", ти ул үҙе лә. Күптән түгел Алтынай тағы ла үҙенең бер ижади эше менән ҡыуандырҙы: Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында "Тәгәрәп китте йомғағым..." тигән аудио-китабының презентацияһын үткәрҙе. Ни хаҡында һуң был аудио-китап? Хәйер, һүҙҙе Алтынай БУРИНАның үҙенә бирәйек әле.**

### Үҙем тураһында һүҙем

Мин өләсәйем Зәйтүнә Зәкәрейә ҡыҙы Ҡыуатова тәрбиәһендә үҫтем. Бала саҡ, тиһәләр, күҙ алдыма иң беренсе мейестә талғын ғына янған ут, уның һүлпән яҡтылығы һәм өләсәйемдең йыйырсыҡлы нурлы йөҙө иҫкә төшә. Шулай уҡ ауылда Рәйлә инәйем (мин уны әсәй тип йөрөтәм) менән Фәйзулла олатайым йәшәй. Үҙемде белгәндән алып, уларҙа булдым, сөнки атайым менән әсәйем сәнғәт өлкәһендә эшләгәс, һәр ваҡыт гастролдәрҙә йөрөнө. Өләсәйемдең тәмләп-тәмләп һөйләгән мөғжизәле әкиәттәре аша сихри донъяны астым, тирә-яҡ мөхитте өйрәндем, яҡтылыҡҡа, яҡшылыҡҡа ынтылдым. Ул беҙгә кистәрен әкиәттәр һөйләһә, көндөҙҙәрен үҙ һөйләшендәге халыҡ мәҡәлдәре, әйтемдәре менән тәрбиә һабаҡтары бирә ине. Өләсәйем беҙҙе бер ҡасан да әрләмәне, һүкмәне, киреһенсә, бәләкәй генә эшебеҙҙе лә хуплап, күңелебеҙҙе күтәреп торҙо. Ә әсәйем мине донъя әҙәбиәте менән таныштырҙы. Йоҡлар алдынан Пушкиндың әҫәрҙәрен шул тиклем әҫәрләнеп һөйләй торғайны, үҙемдең тын да алмай тыңлағаным хәтерҙә.

Әсәйем минә ниндәйҙер эшемде башлаған ваҡытта кәңәштәр бирһә, атайым уны тамамлағас, рәсләп, һығымталар яһап ҡуя. Улар минең һәр эшемде хуплай, ҡулдарынан килгәнсе ярҙам итә. Атайым тәжрибәле режиссер булараҡ, минең хаталарымды төҙәтә. Яңы сыҡҡан аудио-китапҡа исемде лә ул уйлап тапты.

Өфө дәүләт сәнғәт академияһының актерҙар бүлеген, Мәскәүҙә С. Герасимов исемендәге Бөтә Рәсәй дәүләт кинематографистар институтын, Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис академияһын тамамланым. Ирем Рушан менән Тамерлан исемле улыбыҙға, Гәйшә исемле ҡыҙыбыҙға матур тәрбиә бирергә тырышабыҙ.

Йыш ҡына: "Йәш булыуыңа ҡарамаҫтан, күпме үрҙәр яулап өлгөргәнһең", - тип гәжәпләнәләр. Кеше тормошта ниндәйҙер уңыш ҡаҙаныр өсөн, иң беренсе, үҙ-үҙенә хыянат итергә тейеш түгелдер, тип уйлайым. Үҙем 2005, 2008 йылдарҙа И.Коробейниковтың "Проклятый рай" сериалында Айгөл ролен уйнаным, 2007 йылда В.Наумовтың "Джоконда на асфальте" фильмында төштөм, Америка фильмында төшөргә лә насип булды. Мин һәр ваҡыт киләсәккә ҙур-ҙур пландар ҡуйып йәшәйем. Һәр эшемдә ғаиләм, ата-әсәйем, ҡайным менән бейем ҙур ярҙам күрһәтә. Уларға ҙур рәхмәт!

### Әкиәт иле серле...

Бала саҡ тураһында иң яҡты иҫтәлектәр әкиәттәр менән бәйле. Изгелек һәм яуызлыҡ, мөхәббәт һәм нәфрәт, дуҫтар һәм һатлыҡ йәндәр тураһында тәүге һабаҡтар нәҡ әкиәттәрҙән башланды. Нәҡ әкиәттәр аша беҙ хыялдарыбыҙҙа булһа ла Ҡамыр батырға, Урал батырға, Һыуһылыуға, Һомайға әүерелдек.

Йәш ижадташ дуҫтарым менән асҡан "Алтынай" студияһы үҙенең эшен күптән түгел генә башланы. Студия кескәйҙәр өсөн аудио-дискылар сығарыу, театрлаштырылған тамашалар, байрамдар үткәреү менән шөғөлләнәсәк. Балаларға шатлыҡ бүләк итер өсөн беҙ "Тәгәрәп китте йомғағым..." исемле аудио-китап сығарырға булдыҡ. Мин Мәскәүҙә йәшәйем. Өйгә ҡайтҡан ваҡыттарымда ике йәшлек улым Тамерланға аудио-дискыла сыҡҡан урыҫ әкиәттәрен тыңлатҡанымды күреп, әсәйем: "Нинә урыҫ әкиәтен ҡуяһың, башҡортса ҡуйып булмаймы ни?" - тине. Ә башҡортса әкиәт дискылары юҡ. Шул саҡта был эште үҙебеҙгә лә башларға була бит, тигән фекер тыуҙы. Быйылғы йыл Президентыбыҙ тарафынан "Йәштәрҙең башланғыстарын яҡлау һәм үҫтереү йылы" тип иғлан ителде. Беҙҙең был башланғысыбыҙҙы хуплап, ярҙам иткәндәре өсөн Хөкүмәтебеҙгә, эшҡыуар Риф Иҫәновҡа ҙур рәхмәт! Был дискыны Урал Иҙелбаев музыкаль спектакль дәрәжәһенә еткереп биҙәне. Уны балалар баҡсаларында ҡурсаҡтар менән ҡуйып уйнай ҙа алалар.

Әкиәттәр үҙендә халҡыбыҙҙың бөтмәҫ аҡылын туплай, уларҙа беҙҙең отҡорлоҡ та, зирәклек тә, матурлыҡ та, аҡыллылыҡ та сағыла. Әкиәттәр бала тәрбиәләгәндә ҙур әһәмиәткә эйә, ул кешене шәхес булараҡ тәрбиәләргә, үҫтерергә ярҙам итә. Бала әкиәтте аңына һеңдерә, ниндәйҙер хәл-ваҡиға килеп тыуһа, мин ни эшләр инем, тип уйлай, фекер йөрөтә. Уҡыусыларҙа, ни өсөн аудио-китапта әкиәттәрҙе ҡатын-ҡыҙҙар уҡый, тигән һорау тыуыуы мөмкин. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле, һеҙгә бала саҡта әкиәттәрҙе кем һөйләне? Мо-ғайын, өләсәйегеҙ, әсәйегеҙҙер. Үҙем дә өләсәйемдең мөғжизәле әкиәттәрен тыңлап үҫтем. Яратҡан әкиәтемдең береһе - "Урал батыр". Урал батыр тере һыуҙы йотмай, бөтә ергә һипкән кеүек, минең дә кешеләргә яҡшылыҡ, ер йөҙөнә изгелек таратҡым килә торғайны.

Күптәр, ниңә әкиәттәрҙе йәнһүрәт итеп сығарманығыҙ, тигән һорау бирә. Әле был эшебеҙҙең башланғысы ғына, киләсәктә ошо сығарған әкиәттәргә таянып, йәнһүрәт тә төшөрөрбөҙ әле, иншалла. Шулай ҙа аудио-китаптың ыңғай яҡтарын әйтеп уҙайым әле. Видеола беҙ балаға әкиәт геройҙарын әҙер көйө һүрәтләп күрһәтһәк, аудио-китап балаға үҙ аллы фекерләү мөмкинлеге бирә.

Күп әсәләрҙең балаға әкиәт һөйләргә ваҡыты юҡ. Бына шул ваҡытта аудио-китап ярҙамға килә лә инде: уны һәр ваҡыт - йоҡларға һалғанда ла, машинала ла тыңлатырға мөмкин. Бала тыңлаған ваҡытта әсәләр рәхәтләнеп үҙҙәренең көндәлек эше менән шөғөлләнә ала.

"Тәгәрәп китте йомғағым..." дискын улым бик яратып ҡабул итте. Миненсә, әкиәт тыңлап өйрәнгән бала тиҙерәк үҫешә, тормошҡа яраҡлаша ала. Ҡайһы бер ата-әсәләр баланы ҡарарға ваҡыт етмәүенә һылтанып, көндәр буйы уларҙы телевизор алдына ултыртып ҡуя. Хәҙер күп каналдарҙан бер ниндәй мәғәнәһе булмаған алама йәнһүрәттәр күрһәтәләр.

### Халыҡ әкиәттәре - аҡыл донъяһы

Башҡорт халыҡ әкиәттәре бик боронғо, уларҙа сал быуат тарихы, үткәнебеҙ һаҡлана. Беҙҙең әкиәттәр кешенең тәүге һорауҙарына яуап бирә. Мәҫәлән, нимә ул әжәл? Әкиәт батырҙарыбыҙ шул тиклем аҡыллы, зирәк, бер ҡасан да юғалып ҡалмай, һәр бер ауырлыҡты көрәшеп еңеп сығалар. Урыҫ әкиәттәре менән сағыштырып ҡараһаҡ, уларҙа гел хәйләкәрлек менән алдаралар. Беҙҙең әкиәттәр бала күңелендә изгелек, ғәҙеллек, ватансылыҡ тойғолары уята. Башҡорт халыҡ әкиәттәре шул тиклем күп. Шуға күрә әлеге ваҡытта беҙ яҙыусыларҙыҡын түгел, ә нәҡ халыҡ әкиәттәренән аудио-диск сығарабыҙ. Халҡыбыҙҙың һәр йырынан, легендаһынан, риүәйәтенән фильм төшөрөргә була. Алла бирһә, был диск сыҡҡандан һуң, режиссерҙарыбыҙ ошо әкиәттәр буйынса шәп бер фильм төшөрөр, тип ышанам. Баланың әкиәттәрҙе туған телдә тыңлауы мотлаҡ, сөнки уларҙы әсә телендә тыңлап үҫкән бала көслө лә, рухлы ла, аҡыллы ла булып үҫә.

Беренсе аудио-китапҡа ни өсөн нәҡ ошо әкиәттәр инде-релде? Балалар баҡсаһына, мәктәптәргә йөрөп уҡытыусыларҙан, уҡыусыларҙан, балаларҙан, хатта дуҫтарыбыҙҙан һорау алыуҙар буйынса, ошо биш әкиәт - "Бүре менән кәзә", "Ҡамыр батыр", "Ай ҡыҙы", "Йомро-йомро йомғағым", "Сихри моң" иң күп тауыш йыйҙы. Әкиәттәрҙе Гөлдәр Ишҡыуатова, Сәүиә Сираева, Рәсимә Ураҡсина, Сәрүәр Сурина һәм мин уҡыйым. Шулай уҡ "Бүре менән кәзә" әкиәтендә бүре ролен композиторыбыҙ Урал Иҙелбаев уйый. Сығарған дискыларҙың бер өлөшөн беҙ балалар йорттарына таратасаҡбыҙ. Әгәр унда тәрбиәләнгән балалар шул әкиәттәрҙе генә тыңлап шатланһа, үҙҙәрен бәхетлерәк итеп тойһа, сабыйҙар алдындағы бурысымды үтәнем, тип әйтә алыр инем.

Беҙҙең республикала 5121 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы бар. Улар бер генә дәресендә булһа ла уҡыусыларына ошо дискыны ҡуйып тыңлатһа, уның дәресе йәйғорҙың ете төҫөнә мансылыр. Милләтебеҙҙең матур киләсәген күрергә теләһәк, беҙ сабыйҙарыбыҙҙы үҙ телендә яңғыраған халыҡ әкиәттәре менән тәрбиәләргә тейешбеҙ.

Әлегә тиклем башҡорт халыҡ әкиәттәре аудио-дискыла сыҡҡаны юҡ ине. Беҙгә кәңәш биреүселәр етмәй. Хөрмәтле гәзит уҡыусылар, әгәр һеҙҙең әйтер һүҙҙәрегеҙ, бирер кәңәштәрегеҙ булһа, гәзиткә мөрәжәғәт итегеҙ. Минән һорау: һеҙҙең яратҡан әкиәтегеҙ ниндәй һәм киләһе аудио-дискыларҙа ниндәй әкиәттәр ишетергә теләр инегеҙ?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шундай кешеләр була: улар аралашҡан ваҡытта янып торған күҙҙәре менән кешегә көс бирә, ихласлығы менән кешене дәртләндерә, яғымлы, мөләйем булыуы менән кеше йөрәгенә йылы тойғолар һала. Алтынай менән аралашҡан ваҡытта ла уның менән бергә әкиәт донъяһына сумаһың, бала саҡ иленә ҡайтаһың, тауҙарға артылаһың, диңгеҙҙәр кисәһең, ҡитғаларға осаһың... Алтынай Буринаның ниәте сабыйҙарҙы мөмкин тиклем йышыраҡ ҡыуандырыу, уларҙың бәхетле бала саҡ минуттарын әҙ булһа ла оҙайтыу. Уй-хыялдары бик сауаплы - хәйерле сәғәттә!**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

*✓ Күптәр көрсөккә һылтанып, ҡул ҡаушырып ултырғанда Республика балалар клиник дауаханаһы, киреһенсә, ғәйәт ҙур күтәрелеш һәм үҫеш осоро кисерә. Ул Рәсәйҙең иң яҡшы балалар дауаханаһы исемен яуланы.*



СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Балалар - илебеҙ, йәмғиәтебеҙҙең киләсәге, тибеҙ. Тик был ҡайһы саҡ һис бер уйланмай, битараф тонда ҡабатлана торған дежур һүҙҙәргә әүерелде. Ысынында, бөгөнгө балаларҙың физик һәм рухи сәләмәтлеге тураһында уйлағанда күңелде әрнеү, хәүеф тойғоһо биләп ала. Ҡоро һүҙ һөйләү булмаһын һәм мәсьәләнең айышын төптәнерәк төшөнөү өсөн үҙәк матбуғат баҫмаларында (“АиФ”, №35; “АиФ Здоровье”, №39 2009й.) сыҡҡан бер нисә мәғлүмәтте миҫал итеп килтереү урынлы булыр. Уҡыусы иңенә төшкән ауырлыҡ хатта ҡайһы бер өлкән кешеләр өсөн дә көс еткеһеҙ кимәлдә, тип билдәләнә унда. Өйгә эштәрҙе әҙерләү ваҡытын да ҡушып иҫәпләһәң, баланың эш көнө 10-16 сәғәткә барып баҫа! Мәктәп тамамлаусыларҙың ни бары 10 проценты ғына һау-сәләмәт тип табыла. Уҡыу йылдары барышында уҡыусыларҙың дөйөм һанының 50 проценты: аш һеңдереү ағзалары сире менән яфалана; күреү һәләттәре боҙола; 80 процент баланың арҡа һөйәге кәкерәйә; 15 процентының нервылары һәм психикаһы ҡаҡшай; эндокрин системаһы сирҙәре 5 тапҡырға арта; ҡыҙҙарҙың 80 проценты һуңынан бала табыу һәләтен тотҡарлау ихтималы булған хроник ауырыуҙарға дусар ителә.**

**Мәғариф, медицина әһелдәренең, йәмәғәтселектең генә түгел, ә ил һәм хөкүмәт етәкселегенең дә төп иғтибарын балалар сәләмәтлеге мәсьәләһенә йүнәлтеүҙәрен талап итеп, саң һуғырға ваҡыттыр, моғайын. Ошо йәһәттән республикабыҙҙа ғына түгел, Рәсәй кимәлендә билдәлелек яулаған иң ҙур һәм заманса балалар дауалау учреждениеһы - Республика балалар клиник дауаханаһының баш врачы Рөстәм ӘХМӘТШИН менән ул етәкселек иткән коллективтың йәш быуын сәләмәтлеге һағындағы эшмәкәрлеге тураһында әңгәмә ҡорҙоҡ.**



# ХӘСТӘРЛӘҮ ҘӘ АРТА,

## сырхау балалар ҙа күбәйә

**▶ Рөстәм Зәки улы, бөгөнгө мәктәп, күпселек ваҡытын мәктәп стеналары эсендә үткәргән балалар, уларҙың сәләмәтлек торошо хаҡында ниҙәр әйтер инегеҙ?**

- Табип булараҡ, илдә барған мәғариф системаһы проблемалары хаҡында фекер йөрөтөүе миңә яйһыҙыраҡ булыр, ләкин шуныһын анығ билдәләгем килә: мәктәп эшендәге туҡтауһыҙ тәжрибәләр, үҙгәрештәр, уҡыу программаһы күләменең ҡатмарлашыуы һәм, ниһайәт, ауыр портфелдәр, әлбиттә, баланың сәләмәтлек мәнфәғәтен күҙәтмәй. Уҡыусылар иңенә ғәйәт ҙур физик йөк ята, шул уҡ ваҡытта психологик, эмоциональ стресс та үҙенекен эшләй. Тап мәктәп йылдарында балалар организмы формалаша, уға нигеҙ һалына, шуға күрә уларҙың һаулыҡ торошо мәғариф һәм медицина учреждениеларының ғына түгел, ә өсөнсө, иң ныҡлы һәм ышаныслы таяу - ата-әсәләр йәмәғәтселенең төп иғтибар үҙәгендә булырға тейеш. Әлбиттә, врачтар һәр ваҡыт ярҙамға килергә әҙер, ләкин хәлдең табип ҡулына килеп еткәнен көтөргә ярамай. Мәҫәлән, ябай ғына тойолған талап - баланың көн режимын күҙәтеү тулыһынса ата-әсә ҡарамағында. Бала һаулығы күп йәһәттән тап ана шул режим күҙәтеүгә бәйле лә инде. Иң тәүҙә баланың йоҡо шарттарын хәстәрләү мотлаҡ. Бәләкәйҙәр - 10-11 сәғәт, урта класс балалары - 10-11, ә өлкән класс уҡыусылары 8 сәғәттән дә кәм йоҡларға тейеш түгел. Баланың сифатлы һәм төрлө итеп туҡланыуын тәьмин итеү ҙә ҡулдан килмәҫлек эш түгел. Дәрестән һуң компьютер йә телевизорға ҡапланып ултырғансы, саф һауала йөрөү, спорт менән шөғөлләнеүҙең файҙаһы хаҡында ла артыҡ һөйләп тороу кәрәкмәйҙер. Был талаптар үтә ябай тойолһа ла, күптәр уны, нишләптер, һанға һуҡмай. Бөтә бәлә шунан башлана ла инде, үкенескә ҡаршы.

Унан ары балаларҙы сезон һайын ҡабатланып торған йоғошло ауырыуҙарҙан һаҡлау мөһим. Һәр ата-әсә үҙ участка табибы менән кәңәшләшеп, баланың иммунитетын нығытыу юлдарын табырға, сыныҡтырыу сараларын күрергә бурыслы. Прививка эшләтеүҙән дә ситтә тороп ҡалмаһындар ине.

**▶ Үкенескә ҡаршы, балалар көтмәгәндә ауырып китә, йә тыумыштан сырхау, зәғиф булып донъяға килә. Ата-әсә өсөн иң ҙур ҡайғы-хәсрәт был. Ошондай мәлдә уларға ярҙам ҡулы һуҙырға әҙерме беҙҙең Республика балалар дауаханаһы, уның дауалау ҡеүәте бөгөн ниндәй кимәлдә?**

- Республика балалар клиник дауаханаһы 37 йыл инде йәш быуын сәләмәтлеге һағында фиҙакәр хеҙмәт өлгөһө күрһәтә, тип әйтергә баҙнат итәм, сөнки ул Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәй кимәлендә лә иң ҙур дауалау-профилактик учреждениеһына әүерелде. Дауалау эшмәкәрлегенән тыш, бер үк ваҡытта ул юғары технологияға эйә махсуслаштырылған стационар һәм балаларға медицина ярҙамы күрһәтеү буйынса ойоштороу-методик үҙәк тә, медицина кадрҙары әҙерләү өсөн нигеҙ булараҡ та киң танылыу алды.

Дауахана поликлиникаһы көнөнә 500-ләп баланы ҡабул итә. Бынан тыш, беҙҙең 19 дауалау-диагностика хеҙмәте, 785 урынлыҡ 25 клиник бүлексә, 60 урынлыҡ телмәр тотҡарланыуын дауалау бүлексәһе, нейрореабилитация һәм ишетеү һәләтен реабилитациялау үҙәге бар.

Балалар дауаханаһында йыл һайын республикабыҙ ҡала һәм райондарынан (сит төбәктәрҙән килеүселәр ҙә күп) 17 меңдән ашыу бала дауаланып сыға, йылына 6 меңдән ашыу операция эшләнә.

Больницаның иң ҙур ҡеүәте - ул, әлбиттә, унда эшләгән табиптар һәм хеҙмәткәрҙәр. Был хаҡта ла бер-ике һүҙ әйтеп китмәү хилаф булыр ине. Беҙҙә эшләгән 281 врачтың 35 проценты юғары квалификациялы категорияға, 11,5 проценты ғилми дәрәжәгә эйә. Йәғни 6 медицина фәндәре докторы, 32 фән кандидаты эшләй. Медицина хеҙмәткәрҙәре һөнәри оҫталыҡ буйынса төрлө кимәлдәге конкурстарҙа ҡатнаша. Мәҫәлән, былтыр нейрохирургия бүлексәһенең йәш врачы Р. Ғәлимова Европаның балалар нейрохирургтары ассоциацияһы конкурсы еңеүсеһе булды.

Беҙгә мөрәжәғәт иткән бер генә баланы ла, уның һаулығы торошон тикшермәйенсә, кире бороп ҡайтарғаныбыҙ юҡ. Күп осраҡта уларҙы стационарға һалып, дауалау сараһы күрелә. Күптәр бөгөн көрсөккә һылтанып, ҡул ҡаушырып ултырған мәлдә Республика балалар клиник дауаханаһы, киреһенсә, ғәйәт ҙур күтәрелеш һәм үҫеш осоро кисерә. Бер нисә йыл рәттән ул Рәсәйҙең иң яҡшы балалар дауаханаһы исемен яулай. Заманса дауалау технологиялары үҙләштерелә, яңы төр ҡатмарлы операциялар яһала.

**▶ Һуңғы ваҡытта һеҙҙең дауахананың һаңғыраулыҡ менән яфаланыусы балаларға яңы төр операциялар яһауы тураһында йыш ҡына яҙҙылар. Ғөмүмән, гәзит уҡыусыларҙы яңы ҡаҙаныштарығыҙ менән дә таныштырһағыҙ ине?**

- Эйе, Башҡортостан балалар клиник дауаханаһы Рәсәй Федерацияһында беренселәрҙән булып оториноларингологияла юғары технологик ярҙам күрһәтеүгә лицензия яуланы. 2007 йылдан алып учреждениеның оториноларингология бүлексәһендә балаға ишетеү һәләтен ҡайтарыу буйынса операция - кохлеар имплантация эшләнә башланы. Ул ниҙән ғибәрәт? Был нейросенсор һаңғыраулыҡ менән яфаланыусы балаларға артабан йәмғиәтебеҙҙең социаль адаптация үткән тулы хоҡуҡлы ағзалары булырға ярҙам итеү.Ошо ваҡытҡа 56 операция уңышлы эшләнде, бөтә был балалар ҙа Телмәр тоҡтарланыуы, нейрореабилитация һәм ишетеү һәләтен ҡайтарыу үҙәгендә сурдореабилитация үтә.

Нур менән диагностикалау бүлексәһе тарафынан, компьютер һәм магнит-резонанс томографияһын да индереп, Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау йәмғиәте тәҡдим иткән визуаль медицина күҙәтеүенең бөтә өс кимәле лә үҙләштерелде.

Функциональ диагностикалау бүлексәһе мәғлүмәттәрҙе компьютер ярҙамында эшкәртеүсе заманса функциональ аппараттарҙа балалар һаулығын тикшереү буйынса бай тәжрибә тупланы.

Эндоскопия хирургияһы үҙәгендә яңы тыуған сабыйҙан алып бөтә йәштәге балаларға эндохирургия операциялары яһала. Шуларҙың ҡайһы бер төрҙәрен беҙҙең белгестәр Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып үҙләштерҙе. Йәрәхәтләнеүҙе һәм дауалау ваҡытын кәметеү маҡсатында эс һәм күкрәк ҡыуышлыҡтарына, урологияла, отоларингологияла, нейрохирургияла операцияның эндоскопия алымдары торған һайын йышыраҡ ҡулланыла. Беҙҙең дауаханала бөйөрҙәре сирле балаларға, ҡан таҙартыу ысулдары һәм трансплантацияны ла иҫәпләп, бөтә төр медицина ярҙамы күрһәтелә.

Бөгөнгө көнгә бөйөр күсереп ултыртыу буйынса 40 уңышлы операция эшләнде, шуларҙан 13 балаға туғандарының бөйөрө күсерелде.

Яңы тыуған сабыйҙарҙың баш мейеһенә ҡан һауыу осраҡтарын диагностикалау һәм дауалау ысулы эшләнде. Тыумыштан булған бит-яңаҡ өлкәһе зәғифлеге аллоплант ҡулланыу юлы менән бөтөрөлә. Беҙҙең белгестәр шулай уҡ Рәсәйҙә беренсе булып сколиозға дусар булған балаларҙы "Colorado II" металл-конструкция системаһын ҡулланып, оператив дауалау практикаһын үҙләштерҙе. Хәҙер йыл һайын 20-нән ашыу операция эшләнеп, бөтәһе 100 юғары технологиялы операция башҡарыла.

Яңы технологиялар үҙләштереү йүнәлештәре бик күп инде ул, мин уларҙың бөтәһен дә һанап сығыуҙы маҡсат итеп ҡуймайым, ләкин балаларҙы дауалау сифатын һәм һөҙөмтәлелеген күтәреүгә булышлыҡ итеүсе Башҡорт дәүләт медицина университетының беҙҙә хеҙмәттәшлек иткән кафедралары эшмәкәрлеген билдәләп үтер инем. Беҙҙең дауаханала БДМУ-ның 13 кафедраһы уңышлы эшләй. Шуларҙың береһенә - балалар хирургияһы, ортопедияһы һәм анестезиология-реаниматология курстары кафедраһына медицина фәндәре докторы, профессор, академик, БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының баш балалар хирургы, травматолог-ортопеды Айытбай Әхмәт улы Ғүмәров етәкселек итә, уны үҙегеҙ ҙә яҡшы беләһегеҙ. Былтыр "Киске Өфө" гәзите ошо медицина аҡһаҡалы менән әңгәмә ойошторғайны, гәзит уҡыусылар, бәлки, хәтерләйҙер.

Е. Н. Третьякова исемендәге госпиталь педиатрия кафедраһы эшмәкәрлеге иһә шулай уҡ билдәле профессор, академик, Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау йәмғиәте эксперты һәм советнигы Эльза Нәби ҡыҙы Әхмәҙиева етәкселегендә тормошҡа ашырыла. Башҡа кафедралар ҙа дөйөм дауахана ҡаҙаныштарына ҙур өлөш индерә, беҙ медицина университеты етәкселегенә, докторҙарына, ғилми хеҙмәткәрҙәренә ҙур рәхмәтлебеҙ.

Шулай уҡ балалар һаулығын һаҡлау мәсьәләһен даими иғтибар үҙәгендә тотҡан Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимовҡа һәм республикабыҙҙың Хөкүмәт етәкселегенә рәхмәтлебеҙ. Уларҙың ярҙамы менән дөйөм майҙаны 11,5 мең кв. метр тәшкил иткән яңы дауалау һәм диагностика корпустары файҙаланыуға тапшырылды. Республикабыҙ етәкселеге халыҡты һаҡлау, уның физик һәм рухи сәләмәтлеген нығытыуҙы һәм айырыуса йәш быуындың һаулығын һаҡлау мәсьәләһен төп өҫтөнлөктәребеҙҙең береһе итеп ҡарай. Ошондай мөнәсәбәтте, даими хәстәрлекте тойоп эшләгәндә, беҙҙең өсөн яулана алмаҫтай бурыстар юҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Йүгерегеҙ! Бер юлы холҡоғоҙ ҙа үҙгәрер һәм киренән рюмкаға үрелмәслек ихтыяр ҙа тупларһығыҙ. Эсеүҙән ғүмерлеккә ҡотолоу - ул шул уҡ холоҡто, тимәк, характерҙы, яҙмышты, тормошоңдо үҙгәртеүгә тиң.*

ТӘҮБӘ




## 17-се һабаҡ: “Холоҡ - оло юл, Ғәмәл - тәүге аҙым, Ҡылыҡ һәм Ғәҙәт - һуҡмаҡ...”

Алдағы һандағы яҙмала **"Беҙ характерыбыҙҙы үҙгәртә алабыҙ!"** тинек. Был үҙгәреш нисек күҙаллана һуң? Иң башта шундай һорау тыуа: ә нимә һуң ул характер? Характер ул - холоҡ, кешенең булмышы, тәбиғәте. Холоҡтан тыш, ғәҙәт, ҡылыҡ һәм ғәмәл тигән төшөнсәләр бар. Хәҙер инде ошо төшөнсәләрҙе мәғәнә һәлмәклеге, үсеш эволюцияһы буйынса рәткә теҙеп ҡарайыҡ, бәләкәйҙән ҙурая барыу тәртибенә килтерәйек.

Иң беренсе урында, әлбиттә, **ғәмәл** тора. Ғәмәл - һинең көн һайын һәм шулай уҡ бер тапҡыр ғына башҡарған эшең. Һин хатта бер ғәмәлде ғүмереңдә тик бер тапҡыр ғына башҡарырға ла мөмкинһең һәм ул һинән ихтыяр, аҡыл һәм физик көс, ныҡышмалылыҡ талап итә. Сөнки уны башҡарыр өсөн һин ғәмәленә күрә аҡыл һәм хис сарыф итәһең, мәсьәләне сиесеү юлын уйлап табаһың. Ә бер үк ғәмәлде көн һайын бер үк төрлө башҡарһаң, ул ғәмәл генә булыуҙан туҡтап, **ҡылыҡҡа** әйерелә.

Ҡылыҡ - ул күп тапҡыр бер үк төрлө башҡарылған ғәмәл, ул ғәмәлдән һәлмәгерәк һәм бер ни тиклем кимәлдә ихтыяр, аҡыл һәм физик көс һалыуыңды талап итә. Әммә ғәмәлгә ҡарағанда бында әҙерәк көс һәм ихтыяр түгәһең.

Ҡылыҡтың йәшәү рәүешенә әйләнә барыуы **ғәҙәтте** барлыҡҡа килтерә. Ғәҙәт - ул инстинктҡа әүерелгән, автоматлашҡан ҡылыҡ һәм унда ихтыяр, аҡыл һәм физик көс һалыуҙың әллә ни талап ителмәй ҙә. Ғәҙәт - үҙенән-үҙе башҡарыла торған ғәмәл һәм ҡылыҡ, хатта һинең ниндәйҙер маҡсат ҡуйып хәрәкәт итеүеңде лә талап итмәй.

Был теҙмәнең иң аҙағында **холоҡ** тора. Холоҡтоң **фиғел** тигән игеҙәге, һыңары ла бар. Шуға күрә уларҙы ныҙыҡ аша холоҡ-фиғел тип тә яҙалар. Холоҡ ул - **характер**, йәғни ҡаныңа һеңгән, йәшәү рәүешенә әүерелгән, һинең асылыңды, булмышыңды һәм күңел сифаттарыңды билдәләгән ғәҙәтең, ҡылығың һәм ғәмәлең. Әммә холоҡ ғәҙәткә ҡарағанда тәрәнерәк. Кеше сифаттарының иң тәрәне.

Ябайлаштырып алһаҡ, шартлы рәүештә, ғәҙәт - ҡаймаҡ, ә холоҡ иһә шул ҡаймаҡтан яҙылған май. Ул - ҡаймаҡҡа ҡарағанда ҡуйыраҡ һәм төйөрөмләрәк. Ҡаймаҡтан май яҙып була, әммә майҙан кире ҡаймаҡ яһау мөмкин түгел. Шул уҡ ваҡытта һәр бер ҡаймаҡ та май булып етешә алмай. Әлбиттә, былар барыһы ла хужаһынан тора. Холоҡ менән ғәҙәтте ошо мал аҙығы контексында ҡарағанда, ғәмәл ул - һөт. Егәрле хужабикә һөтөн аш итә, йәғни унан төрлө юлдар менән май, ҡорот, эремсек яһай. Бында бары маҡсат ҡуйырға, ялҡаулығыңды еңеп, иртә таңдан тороп, һыйырыңды ғына һауырға кәрәк.

Ялҡау хужабикә бик һуң тора. Ул һыйырын да ашыҡ-бошоҡ һауа. Һөтөн дә аш итмәй, һөт көйө ризыҡлана, йә булмаһа, әсетеп, ҡатыҡ яһай, инде-инде ялҡауланһа, ашлы һыуға түгә, ҡыҫҡаһы, әрәм итә. Тәләфкә сығара. Был сағыштырыуҙан ниндәй һығымта яһарға була: ялҡаулыҡ бар ерҙә ысын характер, холоҡ (май, ҡорот, эремсек) формалашмай. Унда холоҡһоҙлоҡ, характерһыҙлыҡ (әсегән һөт, ҡатыҡ, ашлы һыу) сәскә ата.

Хәҙер инде ошо ерҙә ялҡаулыҡты еңә торған механизмды эшкә егеп ҡарайыҡ, йәғни уны ғәмәл-ҡылыҡ-ғәҙәт-холоҡ сылбырына ҡуйып тикшерәйек.

Мин ата ялҡау икәнмен, ти. Иртәнсәк уянғас та оҙаҡ тора алмай ятам, йә кире йоҡлап китәм. Иртә торған кешегә Хоҙай барыһын да бирә, ти. Ә мин, үҙемдең ялҡаулығымды еңә алмағас, бик һуң торғас, көнө буйы бер эшем дә барып сыҡмай. Һуң торғас, ашыҡ-бошоҡ ҡына ашайым, эшемә һуңлайым. Хужамдан әрләнәм, әрләнгәс, көйефем төшә һәм эшкә ҡулым бармай. Эшем бармағас, минә эш хаҡын да бик аҙ түләйҙәр. Иртәнсәк йүнләп ашамағас, тиҙ генә асығам. Асыҡҡас, хәлем бөтә. Ауырыйым. Аҙаҡ эш урыныңды юғалтам һәм башҡалар, һәм башҡалар.

Урыҫтар йомшаҡ характерлы, бешәлкәһеҙ кешеләрҙе "как прокисшее молоко" йәғни "әсегән һөт" тиҙәр. Мин дә әсегән һөтмөн. Сөнки минә сабый сағымдан алып нисек ҡаймаҡ, нисек итеп май булыу юлын өйрәтмәгәндәр. Әммә һөттән, ҡаймаҡтан һәм майҙан айырмалы рәүештә, мин бит - кеше. Минең аҡылым бар, хисләнеү һәләтенә лә эйәмен.

Үҙ-үҙемде үҙгәртер, ялҡаулығымды еңер өсөн иң тәүҙә ошо йүнәлештәге тәүге ғәмәлде табырға бурыслымын. Ул да булһа - таңғы алтынан тороп йүгереү. Мин быға тиклем иртәнге туғыҙға тиклем йоҡлап өйрәнгәс, тәнем дә ҡатып бөткән, эсеүем һәм тәмәке тартыуым арҡаһында тыным ҡыҫыла, йөрәгем дөп-дөп килә. Йәғни тәүге ғәмәлде башҡарыр өсөн минә бик ҙур ихтыяр, аҡыл һәм физик көс түгергә тура киләсәк.

Ярай, үҙ-үҙемде һуңғы һүҙҙәр менән әрләнем, намыҫландым, ғәрләндем, егәрле кешеләрҙең донъяһына ҡарап көнләштем, сәмләндем, эскелек арҡаһында донъянан иртә китеүселәргә ҡарап ғибрәтләндем - һәм тәүге ғәмәлде башҡарҙым. Йүгереп киттем, боҙ ҡуҙғалды... Иң ауыры - тәүге көн икән, сөнки ул иң ҙур көс һалыуыңды талап итә. Сөнки ул үҙ-үҙеңде еңә башлауҙың тәүге аҙымы, үҙ-үҙеңә, булмышыңа, тәбиғәтеңә һуғыш иғлан итеү, намыҫың ихтилалы! Утлы йылғаға ташланыуың...

Икенсе көн тағы ауырыраҡ, сөнки кисә генә кисергән һәм татыған тән һәм йән ауырлығы минә таныш. Сирҡандыра, ытырғандыра, булмышым утлы йылғаны үҙ итмәй ҡарыша. Әммә... Әммә икенсе көндө инде минә әҙер, кисә генә һалынған һуҡмаҡтан йүгерергә тура килә. Йәғни ауыр булһа ла, минә маршрутымды уйлап сығарағы түгел. Таныш көсөргәнеш, таныш ауырлыҡ - әҙер һуҡмаҡ. Кисәгегә ҡарағанда ауырыраҡ булһа ла, былар барыһы ла минә таныш, бер тапҡыр кисерелгән ауырлыҡ.

Шулай итеп, көндән-көн бер үк ғәмәлде башҡарыуым минең ҡылығыма күсә барҙы. Тәүге көндәр һәм айҙар ауыр булһа ла, һуңынан таңдан тороп йүгереү еңеләйә, сөнки мин бының өсөн артыҡ ихтыяр, аҡыл һәм физик көс сарыф итмәнем. Инде килеп, иртә таңдан тороп йүгермәйенсә булдыра алмайым. Йүгермәй тора алмауым минең ғәҙәтемә әйләнгән. Ә инде ғүмерем буйы таңдан тороп йүгереүем - **холҡом**!

Холоҡто, характерҙы үҙгәртеүҙең был иң тәбиғи һәм ябай юлы. Холоҡ ул - ғәмәлдең бүләһе, ғәҙәт - ейәне, ҡылыҡ - балаһы. Барыһы ла ғәмәлдән башлана. Холоҡ - оло юл, ғәмәл - юл башы, ә ҡылыҡ менән ғәмәл - көн һайын таңғы алтынан тороп йүгергән, **оло юлға** сығара торған һуҡмағың. Иң ауыры - тәүге аҙымың, юл башы. Юҡҡа ғына Ҡөрьәндә "Сәбәп ҡыл" тип әйтелмәй.

Мин эсеүемде ташлағандың икенсе көнөнән башлап, бер туҡһауһыҙ йүгерәм. Башҡаларға ла үҙ маршрутымды тәҡдим итәм. Ҡулымды йөрәгемә ҡуйып әйтәм: эсеүҙе ташлау ҙа - шул уҡ йүгерә башлау кеүек тәүге ғәмәлде башҡарыуға тиң. Йүгерегеҙ! Юҡ, шунда уҡ, иртәгеһе көндөң таңынан тороп йүгерә башлағыҙ. Бер юлы холҡоғоҙ ҙа үҙгәрер һәм киренән рюмкаға үрелмәслек ихтыяр ҙа тупларһығыҙ. Эсеүҙән ғүмерлеккә ҡотолоу - ул шул уҡ холоҡто, тимәк, характерҙы, тимәк, яҙмышты, тимәк, тормошоңдо үҙгәртеүгә тиң.

Йүгерегеҙ! - Ғәмәл! Йүгерегеҙ! - Ҡылыҡ! Йүгерегеҙ! - Ғәҙәт! Йүгерегеҙ! - Холоҡ! Фиғел! Характер! Йүгерегеҙ! - Яҙмыш! Йүгерегеҙ! - Тормош! Йүгерегеҙ! - Ғүмер!

Ҡыҙыҡ! Рәсми телдә төрмәне "холоҡ төҙәтеү учреждениеһы" тип тә әйтәләр. Уны шулай уҡ "характерҙы үҙгәртеү учреждениеһы" тип тә атарға була бит. Төрмәнән күп кешеләр тәүбәгә килеп, донъяға ҡарашы үҙгәреп сыға. Күптәре төрмәнең эске иерархияһы ҡыҫымында, киреһенсә, боҙола. Холҡондо, характерыңды үҙгәртеү - ул үҙ-үҙеңде "ихтыяр төрмәһе"нә бикләү ҙә. Тик теге төрмәнән айырмалы рәүештә, был "төрмәлә" һинең шәхесең - азат. Йылдар буйына, көн һайын таңдан тороп билдәле маршрут буйынса, һуҡмаҡ буйынса йүгереү һәм оло юлыңды һалыу - ул характерыңды үҙгәртеү.

Кешенең мейеһе автомат түгел, шул уҡ таңдан тороп йүгергән саҡта ла, әллә ниҙәр уйлайһың, мейең ҡырҡҡа тунҡарелә. Ҡайны саҡ шул уйҙарың йүгереп барған ерендән генә түгел, ғөмүмән, был ғәмәлеңде башҡарыуҙан туҡталып ҡалырға мәжбүр итә. Ындай уйҙарҙан нисек ҡотолорға була һуң? Алдағы һанда шул турала һөйләшербеҙ.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Бүтәндәр менән сағыштырма…

**Джилл класҡа ингәс, тирә-яғына ҡаранып алды. Кэтиның колледждың футбол командаһы капитаны менән шаярыуын, ҡиммәтле юбкаһын рәтләп, модалы күн туфлиҙарын күрһәткәндәй, бер аяғын икенсеһенә һалып ултырғыста останлауын күргәс, уның кәйефе төштө.**

Кэти матур һәм нәҙәкәтле ҡыҙыҡай. Ул һәр көн кейем алмаштыра, һәр хәлдә, Джилға һәм уның әхирәттәренә шулай тойола. Бай ата-әсәһе менән Джилл хыялда итмәгән экзотик илдәр һәм донъяның билдәле ҡалалары буйлап сәйәхәт ҡыла. Джилл иһә, яҡшы уҡыусы, һәләтле актриса һәм йырсы булһа ла, һәр саҡ Кэти янында үҙен килбәтһеҙ һәм уңайһыҙ тоя. Ул әсәһе менән генә йәшәй. Әсәһе ал-ял белмәй эшләһә лә, килем торлаҡ сығымдарын ҡаплауҙан, кәрәк-яраҡ әйберҙәр һатып алыуҙан һәм иҫке автомобилде сафта тотоуҙан үтмәй, шулай булғас, кейемһалымға аҡса бик аҙ ҡала. Джилл ижади ҡарашлы ҡыҙ, кейемде лә үҙе тегеп кейә, уның эшен тирәйүндәгеләр һәр ваҡыт маҡтап телгә ала. Әммә Кэти янында булғанда уның ҡиммәтле кейемдәре менән Джилл үҙе теккән әйберҙәрҙең айырмаһы күҙгә ташланып торғандай тойола. Ул Кэтинан ҡаса башлай.

Бер саҡ уҡытыусы ниндәйҙер предметты өйрәнеү өсөн уҡыусыларҙы иштәргә бүлә, Джилл уҡыу буйынса үҙенең ише Кэти буласағын ишетеп, хафаға ҡала. Кэтиның үҙ йылмайып ҡарауына, Джилл илтифатлыҡ күрһәтеп, ултырғысын яҡынайтайым тигәндә, кемдеңдер аяғына эләгеп, ҡолай яҙа. Класташтарының көләүенән ҡыҙарынып, Кэти янына күсеп ултыра. "Ярай, эшкә тотонайыҡ", - ти, Джилл ҡыҙған тауыш менән. Ул текстан һүҙҙәр һайлап алып, Кэтиның хаталарын төҙәтә-төҙәтә, уларға билдәләмә биреүен һорай. Бер нисә уңышһыҙ ҡабатлауҙарҙан һуң Кэти оялыу кисерген кеүек тойола. Ә инде Джилл бер ни тиклем ярҙам күрһәткәндән һуң, ул былай ти: "Һинең үҙенә күпкә зирәгерәк иш таба алырыңды мин беләм, әгәр ҙә икенсе берәүҙе алырға теләһәң, мин ҡаршы түгелмен". Былдай һүҙҙәрҙән шаңҡып, Джилл тәүге тапҡыр Кэтиның күҙҙәренә баға һәм уның ни тиклем төшөнкөлөккә бирелеүен күрә. Уңайһыҙланып, Джилл ҡарашын ситкә йүнәлтә. "Мин һәр ваҡыт һинең яныңда үҙемде ышаныһыҙ тоям, - тип дауам итә Кэти. - Был эште башҡарып сыға алырмынмы инде, белмәйем".

Джилл Кэтиға иҫе китеп ҡарап: "Һин үҙеңде минең янымда ышаныһыҙ тояһыңмы?" - тип үҙ ҡолаҡтарына ышанмайынса ҡабатлап һорай. Был һүҙҙәр Кэтины аптыраушта ҡалдыра: "Эйе. Мин бер ваҡытта ла һин эшләгәнде эшләй алмаҫ инем! Һин үҙеңә шул тиклем ышанаһың, әйтерһең дә, бөтә нәмәне лә эшләй алырыңды беләһең. Һин класс алдында яуап биргәндә йәки ҡыҫҡырып уҡығанда үҙеңде тыныс тотаһың. Ә нисек итеп йырлайһың һин! Мин быларҙың барыһын да һинең кеүек эшләй алыр өсөн әллә ниҙәр эшләргә әҙер булыр инем".

Шул ваҡыт Джилл уларҙың бер-береһен сағыштырыуы күҙгә күренгән әйберҙәргә генә нигеҙләнеүен аңлай. Джилл үҙен Кэти янында түбән һәм яҡлауһыҙ итеп тойғанда, Кэти ла үҙенә ҡарата ошо уҡ тойғоларҙы кисергән. Был улар кейгән кейемгә лә, улар башҡарған ғәмәлгә лә бәйле булмаған.

Бүтәндәр менән сағыштырып, үҙеңде әһәмиәтһеҙерәк итеп тойған мәлдәрҙә, тышҡы ҡиәфәт йыш ҡына алдаусан булыуын иҫтә тот. Беҙ тик тышҡы тәьҫораттарға ғына таянып, үҙебеҙҙе бүтәндәр менән сағыштыра башлайбыҙ икән, был тойғо яман шеш кеүек, беҙҙе эстән ашай. Әлбиттә, бүтәндәр нимәнеләр беҙгә ҡарағанда яҡшыраҡ эшләй - был тәбиғи. Беҙҙең һәр кемебеҙ уникаль талантҡа һәм һәләттәргә эйә, һәм тап шул беҙгә һалынған һәләттәрҙе үҫтереү - бәхеткә алып барыусы хаҡ юл булып тора ла инде.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

ИНТЕРНЕТТАН



# РӘСӘЙ ХАЛҠЫ...
## 11 миллионға кәмейәсәкме?

■ 2014 йылда Ильич лампалары ҡулланылыштан алынасаҡ, был рәсәйлеләргә электр энергияһына сығымдарҙы 25 процентҡа тиклем ҡыҫҡартырға мөмкинлек бирәсәк, тип иҫәпләйҙәр Рәсәй Иҡтисад үҫеше министрлығында. Министрлыҡ Дәүләт Думаһына энергияны һаҡсыл ҡулланыу тураһында яңы закон тәҡдим итте. Әгәр ҙә ул ҡабул ителһә, 2014 йылдан хәҙерге электр лампаһын энергияны бер нисә тапҡыр аҙыраҡ ҡулланған һәм оҙағыраҡ хеҙмәт иткән лампа алыштырасаҡ. Бынан тыш, бөтә рәсәйлеләргә лә йорттарында һәм фатирҙарында һыу, газ һәм йылылыҡ счетчиктары ҡуйыуҙы талап итәсәктәр.

■ Рәсәйҙең баш санитар табибы Геннадий Онищенко мәктәп уҡыусыларын наркотиктарға тикшереү тәҡдимен хупланы. "Балаларҙы туберкулезға тикшергәндә беҙ кеше хоҡуҡтарын боҙмайбыҙ ҙа инде, наркотиктарға тикшереү ҙә ошо тәртип буйынса башҡарыласаҡ," - тип белдерҙе ул. Анализдарҙың һөҙөмтәләре тураһында табиптарҙан башҡа бер кем дә белмәйәсәк, уларҙы балаға һәм ата-әсәгә генә әйтәсәктәр.

■ Эскелек һөҙөмтәһендә 2025 йылға Рәсәй халҡы 11 миллионға кәмейәсәк, тип белдерелә БМО Үҫеш программаһында һәм демографик һәләкәттең төп сәбәбе итеп түбән йәшәү кимәле һәм алкоголде самаһыҙ ҡулланыу күрһәтелә. Был хәлдән илгә күпләп ағылған мигранттар ҙа ҡотҡара алмаясаҡ - хеҙмәткә яраҡлы халыҡ иҫәбе кәмеүен дауам итәсәк. Был үҙ сиратында Рәсәйҙең иҡтисади үҫешенә тотҡарлыҡ яһаясаҡ. Демография, миграция һәм төбәк үҫеше институты рәйесе Юрий Крупнов әйтеүенсә, БМО килтергән был һан дөрөҫлөккә тап киләсәк, әммә тыуымдың кәмеүендә төп сәбәп алкоголь түгел, ә уны ҡулланыуға этәргән сәбәптәр, йәғни илдәге социаль-иҡтисади хәл ғәйепле.

■ Рәсәйҙә сусҡа киҙеүе менән 570 кеше ауырыған, был һанды Рәсәйҙең баш санитар табибы Г. Онищенко белдерә. Вирус йөрөтөүселәрҙең күбеһе уны сит илдә, ә 80 кеше туғандарынан һәм яҡындарынан йоҡторған. Мәскәүҙә ошо сәбәп менән мәктәптәрҙә бер нисә синыф карантинға ябылған.

■ Дәүләт Думаһы һыраны алкоголле эсемлек тип атарға тәҡдим иткән документты тикшерә. Ул ҡабул ителһә, был күбекле эсемлекте һәр мөйөштәге киоскынан һатып алып булмаясаҡ, хаҡы ла күтәреләсәк. Был тәҡдим менән "Справедливая Россия" фракцияһы депутаты Антон Беляков сығыш яһай. Уның фекеренсә, 1995 йылда һыра етештереүсе компаниялар һыраны алкоголле эсемлектәр исемлегенән алып ташлауға ирешеп, Рәсәй баҙарын баҫып алды, һөҙөмтәлә уларҙың продукцияһы лицензияланмай, телевидение һәм радиола рекламалана, киоскыларҙа ирекле һатыла. Былар барыһы ла күңелһеҙ статистикаға килтерҙе: әгәр ҙә 90-сы йылдарҙа һыра ҡулланыу кеше башына йылына 15 литр тура килһә, бөгөн был һан 80 литрға еткән. "Һыра ҡулланыуҙың төп ҡурҡынысы шунда: уны ҡулланыусыларҙың күбеһе бәлиғ булмағандар һәм 30 йәшкә тиклемге йәштәр. Әгәр ҙә һыраны алкоголле эсемлектәр исемлегенә индерһәк, был сара уны ҡулланыуҙы түбәнәйтәсәк һәм унан йәштәрҙе ҡурсалап ҡалырға мөмкинлектәр тыуасаҡ", - ти депутат.

■ "Тәгәрмәсле транспорт саралары хәүефһеҙлеге тураһында"ғы яңы регламент ҡабул ителеү сәбәпле, хәҙер илгә машиналарҙың күп популяр моделдәрен индереү сикләнәсәк. Хөкүмәт руле уң яҡта булған машиналар мәсьәләһен хәл итеп, сентябрҙә япон машиналарын һатып алыуға рөхсәт бирелгәйне һәм күп водителдәр быға шатланып өлгөргәйне. Әммә яңы регламентта VIN-номер һәм уларҙың Рәсәй талаптарына ярашлығы тураһында яңы бүлек ҡабул ителгән (VIN машинаның сығарыу ваҡытын һәм урынын билдәләп була торған 17 һанлы кодҡа эйә булырға тейеш). Бындай VIN-дар барлыҡ Рәсәй, Европа һәм Америка машиналарында ғына бар. Күп япон автомобилдәрендә был VIN 11 һанлы, тимәк, улар Рәсәйгә йәшерен рәүештә генә индерелә.

БАШ ЭШЛӘТМӘК




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**Ҙур зал. 20 октябрҙә** "Шаян-шоу" - "Беҙгә барыбер" КВН командаһы призына үткәрелгән Башҡорт КВН лигаһының сираттағы уйындары була. Көҙгө уйындарҙа Башҡортостан ҡала һәм районларынан (Учалы, Мәләүез, Бөрйән, Хәйбулла, Ишембай) алты-ете команда ҡатнашыуы көтөлә, КВН-дың ҡунағы - былтырғы уйындарҙа еңеүсе "Strike" командаһы (Стәрлетамаҡ).

**23-24 октябрҙә** "Далан" төркөмө "Башҡорт балы" исемле яңы концерт программаһы тәҡдим итә. Программала өр-яңы йырҙар,популяр хиттар яңғыраясаҡ. Башҡорт балы бар донъяла үҙенең шифалы үҙенсәлектәре менән билдәле. "Далан" төркөмөнөң йырҙары ла күңелгә май булып яғыла, балдай татлы яңғырай. Концерт алдынан БР апитерапия һәм ҡортсолоҡ буйынса ғилми-тикшеренеү институты башҡорт балын татып ҡарау һәм һатыу ойоштора.

**Орган залы. 20 октябрҙә** инструменталь музыка кисәһе үтә. Унда Дмитрий Васильев (скрипка, Мәскәү) һәм Олег Полянский (фортепиано, Германия) ҡатнаша. Программала К.Дебюсси, И.Стравинский, И.Брамс әҫәрҙәре яңғырай.

**Хөрмәтле гәзит уҡыусылар! Түбәндәге һорауға тәүгеләрҙән булып яуап биргән өс кешене "Далан" төркөмө концертына саҡырыу ҡағыҙы көтә.**

**Һорау:** "Далан" төркөмөнөң тәүге альбомы нисәнсе йылда сыҡҡан?

**40-сы һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Велосипед. Ғиззәтуллина. Литраж. Шланг. Мышар. Триполи. Нерон. Һабантуй. Ҡарға. Волгоград. Лайка. Радиатор. Ирк. Натр. Тау. Барометр. Дошманлыҡ. Танау. Кимерсәк. Ҡамҡа. Аҡын. Ҡарбуз. Ихтирам. Иҙелмә. Акация. Нонсенс. Кадр. Янғантау. Игрек. Стачка. Индиго. Ойотҡо. Айыу.

**Вертикаль буйынса:** Ижад. Теләктәш. Мурҙа. Погон. Азия. Айыл. Ғәли. Миҡдар. Ҡауын. Инкогнито. Вәзир. Моряк. Журнал. Оғуз. Соло. Шифр. Гимнаст. Ағза. Примадонна. Егет. Гәүһәр. Беләк. Урарту. Алла. Ирәүән. Рәсем. Ариозо. Етегән. Монар. Тире. Сәнске. Рефрен. Кактус.

*МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ*

# СӘСӘНДӘРЕБЕҘ ҺҮҘЕ...

## Халыҡ-ара фестивалдә яңғыраны

**Күптән түгел Ҡалмыҡ республикаһының Элиста ҡалаһында "Джангар нәҫеле ерендә донъя эпостары" тигән III халыҡ-ара сәсәндәр фестивале булып үтте. Ҡалмыҡтарҙың үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылыуының 400 йыллығы сиктәрендә үткән был сарала сәсәндәр, филологтар, әҙәбиәтселәр, сәнғәт белгестәре Рәсәй, Ҡаҙағстан, Монголия, Ҡытай халыҡтарының эпик жанр өлгөләрен тыңланы, эпос һөйләү оҫталығы менән уртаҡлашты һәм "Эпос һәм хәҙерге заман мәҙәниәте" тигән фәнни-ғәмәли конференцияла ҡатнашты. Беҙҙең республиканан был сарала Сибай ҡалаһы сәсәниәһе Асия Ғәйнуллина, уның улы - Сибай политехник колледжы студенты Баязит Ғәйнуллин һәм Хәйбулла районынан Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, танылған ҡурайсы Илдар Юнысов сығыш яһаны. Фестиваль хаҡындағы тәьҫораттары менән Асия Солтан ҡыҙы ҒӘЙНУЛЛИНА уртаҡлаша:**

- Мин был Япония, Монголия, Ҡытай һәм башҡа илдәрҙән вәкилдәр ҡатнашҡан фестивалдә өсөнсө тапҡыр сығыш яһайым. Был юлы ул ике төп өлөштән торҙо. Уның бер көнө эпос һөйләүгә бағышланды. Мин "Аҡһаҡ ҡола"ның "Биш ҡолон" версияһын, Баязит "Ҡуңыр буға"ның икенсе вариантын, Илдар Юнысов "Заятүләк менән Һыуһылыу"ҙы һөйләнек. Беҙҙең эпостар матур яңғыраны, халыҡ тарафынан ихлас ҡабул ителде. Быға тиклем ҡалмыҡ, монгол халыҡтарында ҡатын-ҡыҙҙар эпос һөйләмәгән. Минең был сарала ҡатнашыуым йоғонто яһамай ҡалманы. Хәҙер уларҙа ла ҡатын-ҡыҙҙар эпос һөйләргә өйрәнеп, иргеттәр менән рәттән сығыш яһай башлаясаҡ. Сараның рәсми өлөшөндә ошондай һүҙҙәр яңғыраны: "Башҡортостан сәсәниәһе өлгөһөндә беҙ ҙә ҡыҙҙарыбыҙҙа сәсәнлек һәләттәрен үҫтереп, уларҙы был оҫталыҡҡа өйрәтә башланыҡ".

Фестивалдең икенсе көнөндә уҙғарылған фәнни-ғәмәли конференцияла иһә "Башҡорт халҡының тарихы һәм риүәйәттәрендә ҡалмыҡтар" тигән доклад менән сығыш яһаным. Тәүҙә мин Әйге хан менән башҡорттар араһындағы килешеүҙе һөйләп киттем һәм Учалы районының Рәсүл (Тайсын) ауылы тарихына ҡағылдым. Ул тарих шулай: Рәсүл тарханға ҡалмыҡтар килеп туҡтай ҙа, өс башҡорт атына үҙҙәренең имсәк балаһын алмаштырып алып китә. Уның исеме Тайсын була. Мәргәнлектә һынатмаған Рәсүлдең өлкән улы шаяртып, был балаға алыҫтан тороп та, яҡындан тороп та уҡтан атып ҡарай, тик уҡ балаға теймәй. Бындай сәйер хәлдән ҡурҡып, ул башҡаса балаға теймәй. Рәсүл тархан Тайсынды яҡшы итеп тәрбиәләй һәм үҙенең урынына тархан итеп ҡалдыра. Шуға ауыл Рәсүл һәм Тайсын тигән ике исем йөрөтә. Ҡалмыҡтарға ҡағылышлы икенсе тарих ошолайыраҡ яңғырай. Беҙҙең Хәйбулла районында Иләш, йәки Турат ауылы бар. Риүәйәттәрҙә ҡалмыҡ егетенең үҙенең тураты менән ошо ауыл эргәһенән үтеп барышлай бер версия буйынса - Көнһылыу, икенсе версия буйынса Гөлғәйшә тигән ҡыҙға ғашиҡ булыуы һүрәтләнә (Мин Гөлғәйшә версияһында туҡталдым). Ул ҡыҙға: "Көт мине, яҙ көнөндә ҡара ҡаҙ килеп ҡаңҡылдаған ваҡытҡа мин дә яусылай килермен", - тип әйтеп китә. Көндәрҙең бер көнөндә Гөлғәйшә, ҡыуанысын тирмәләге еңгәйҙәренә шулай ти: "Ҡара ҡаҙ ҡаңҡылданы, тимәк, минең көткән ҡалмығым килергә тейеш", - ти. Тирмәнән сығып ҡараһалар, ҡаршы тау башында бер вариант буйынса - аҡ, икенсе вариант буйынса йәшел сатыр тора. Унан теге ҡалмыҡ егете килеп сыға. Еңгәйҙәр уның шулай тиҙ генә килеп етеүенә аптырағас, егет атының шәплеге менән яуап бирә. Сатыр эсендә кем барлығын һорағас: "Бер кем дә юҡ, шулай ҙа уның янына барһағыҙ, тауыш биреп барығыҙ", - ти. Ҡалмыҡ егетенең тураты ҡанатлы матур ат була. Еңгәләр шым ғына сатыр эсенә барып инһә, унда турат ҡанаттарын йәйеп ятҡан була. Быларҙың һоҡланыуынан атҡа күҙ тейә һәм үлә. Егет атты алтын эйәре һәм көмөш йүгәндәре менән ошо ауыл эргәһенә күмә. Был ерҙе Турат сағылы тип йөрөтәләр. Беҙ ошоға бәйле Турат көйөн уйнап ишеттерҙек.

Был республикала нимә иғтибарҙы йәлеп итте: Элиста ҡалаһының ҡап уртаһында ҡалмыҡ джангарчыһы, йәғни "Джангар" ҡалмыҡ халыҡ эпосын һөйләүсе Ээлян Овлаға һәйкәл ҡуйылған, бынан тыш сәсәндәргә арналған һәйкәлдәр күп һәм уларҙың һәр береһе тәрән мәғәнәгә эйә. Тағы ла шул: ҡалмыҡтар "Джангар"эпосын быйылдан алып мәктәптәрҙә 1-се кластан уҡытырға тигән ҡарар ҡабул итеп, дәрес программаһы төҙөгәндәр. Әйткәндәй, ҠР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - мәғариф, мәҙәниәт һәм фән министры Бадма Салаев әйтеүенсә, быйыл ноябрь айында сәнғәт, мәҙәниәт белгестәре, фольклор буйынса фән докторҙарынан торған делегация беҙҙең Башҡортостанға экспедицияға килергә йыйына.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҙеңдең рухи ҡиммәттәреңде, милли йолаларыңды һаҡлау һәм үҫтереү өсөн үҙ ҡаҙаныңда ҡайнау ғына етмәй, ә сит илдәргә сығып, уларҙың йәшәйеше, мәҙәниәте, тарихы менән танышып, фекер алышып, тәжрибә уртаҡлашып ҡайтыу ҙа кәрәк. Беҙҙең яҡташтарыбыҙ ҙа был сәфәрендә үҙҙәренең ялҡынлы сығыштары менән бергә, башҡорт мәҙәниәтен, уның традицияларын лайыҡлы күрһәтеп ҡайтҡан. Быны Ҡалмыҡстандың "Правительственная газета"һында яҙылған түбәндәге һүҙҙәр ҙә дәлилләй: "Илдар Юнысов, Асия һәм Баязит Ғәйнуллиндар Башҡортостандың халыҡ ижады менән таныштырҙы. Фестивалдең даими ҡатнашыусыһы Асия Ғәйнуллинаның сығышы иң сағыуҙарҙың береһе булды. Бында телде аңламау кәртә булып тора алманы: сәсәниәнең юғары башҡарыу оҫталығы тамашасыларға хистойғононң бар балҡышын тотоп алырға ярҙам итте".**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**



*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАЙЛЫҒЫҢДЫ...

## теге донъяға күсереп булмай

Дөрөҫ һүҙгә үпкәләргә ярамай, уның үҙенә лә шул уҡ дөрөҫлөк менән яуап бирергә кәрәк.

**(Данил Рудый).**

Кеше ғүмере шулай үтә: бәләкәй генә ҡаршылыҡтарға ҡаршы көрәшергә ҡурҡаһың һәм бер туҡтауһыҙ йәненә тыныслыҡ эҙләйһең, ә ундай ҡаршылыҡтар булмай башлағас, өлгәшелгән йән тыныслығы түҙеп тормаҫлыҡҡа әйләнә.

**(Б. Паскаль).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер бик бай һәм аҡыл эйәһе сауҙәгәр ауырып китә. Үҙенең тиҙҙән теге донъяға күсәсәген аңлағас, янына берҙән-бер улын саҡырып ала һәм былай ти: "Улым, миңә был донъяны ҡалдырып, баҡыйлыҡҡа күсергә ваҡыт килеп етте. Һуңғы үтенесем шул: мәйетемде кәфенгә төрә башлағас, хеҙмәтселәргә минең һул аяғыма иҫке башмағымды кейҙерергә бойороҡ бир". Ошо һүҙҙәрҙе әйтә лә, йән бирә сауҙәгәр.**

**Уны һуңғы юлға оҙатырға бик күп халыҡ йыйыла. Мәйетте мосолман йолаһы буйынса тәрбиәләп, кәфенгә төрә башлағас, улы бер хеҙмәтсеһенә иҫке башмаҡ тоттора һәм атаһының һул аяғына кейҙерергә бойора. "Был мөмкин түгел, - ти хеҙмәтсе, - беҙҙә ундай йола юҡ!" "Был бит атайымдың һуңғы үтенесе, ул теләгәнсә эшләгеҙ, зинһар..." - ти егет илай-илай. "Мосолман ҡануны буйынса мәйет бары тик кәфенгә төрөлөргә тейеш. Мин был ҡағиҙәне боҙа алмайым" , ти хеҙмәтсе. Егет кеше ни эшләргә лә белмәй, һуңғы үтенесен үтәмәйенсә, атаһының мәйетен зыяратҡа алып китеүҙәрен теләмәй ул. Шунан мәйетте мосолманса ерләү ҡанундарын ныҡлап белгән башҡа кешеләрҙе эҙләтә башлай. Ул кешеләр ҙә мәйеттең аяғына башмаҡ кейҙереүгә ҡаршы була. Шулай итеп, сауҙәгәрҙе уның һуңғы үтенесен үтәмәйенсә, әммә бар ҡағиҙәләрҙе күҙәтеп, зыяратҡа алып барып ерләйҙәр.**

**Ҡәбер эргәһендә күҙ йәше түгеп ултырған егеткә атаһының яҡын дуҫы килеп өндәшә һәм уға хат тоттора. Был хатты уға атаһы тере сағында яҙған була: "Улым, мин һиңә бар байлығымды ҡалдырам, уларҙы аҡыл менән тотон, һаранланма, юҡҡа-барға туҙҙырма ла. Мин туплаған байлыҡ һиңә тормошта дөрөҫ юл һайларға ярҙам итһен. Ҡасандыр берәй ваҡыт һин дә минең эргәмә күсерһең - кеше мәңгелек түгел. Шуны хәтереңдә тот: ерҙәге юлың тамамланғас, һин ул тормоштағы бер байлығыңды ла, хатта бер нигә ярамаған иҫке башмаҡтарыңды ла үҙең менән алып китә алмаҫһың..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәррирәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5615
Заказ 4465